ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8-14 октябрь (ҡарасай) 2016

№41 (719)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Спорт һөйәбеҙ,**




5

**Хәүефһеҙлегең хаҡында...**




6

**Ул шанлы ла, данлы ла йылдар...**



7

**Көрәш, уҡ атыу, ылаҡ...**



ҡырғыҙҙар йыйыҙы ҡунаҡ 8-9

ТВ-программа 14

***ИҒТИБАР! 13 октябрҙән 23 октябргә тиклем арзан хаҡҡа 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо арауыҡта ВО665 индекслы гәзитебеҙгә - 450 һум 06 тингә, ВО673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 478 һум 56 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 410 һум 22 тингә яҙыла ала (мәғлүмәттең дауамы 2-се биттә).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Мин Башҡортостанда йәшәйем!" тигәндә ниндәй тойғолар кисерәһегеҙ?




***Лом-Али ИСРАИЛОВ, Башҡортостандағы "Барт" чечен ижтимағи-мәҙәни үҙәге йәмғиәт ойошмаһы рәйесе:*** Әлбиттә, ошо һүҙҙәрҙе әйтеү менән ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерәм, сөнки республикабыҙ күп милләтле булһа ла, бында үҙ-ара ихтирам, тотороҡлолоҡ тантана итә һәм был - иң мөһиме.

Төньяҡ Кавказда һуғыш барғанда бик күп милләттәштәрем Башҡортостанға килеп һыйыныу тапты. Ул ваҡыттарҙа һаныбыҙ 4 меңгә барып еткәйне. Чечняла тыныслыҡ урынлашҡас, күптәр кире ҡайтты, ҡайһы берәүҙәр тороп ҡалды. Бөгөн иһә республиканың төрлө райондарында 800 чечен ғаиләһе йәшәй һәм эшләй. Мосолман республикаһы булараҡ, Башҡортостанда мәсеттәр күп һәм беҙ уларға ғибәҙәт ҡылырға ғына түгел, ә дин ҡәрҙәштәребеҙ менән аралашырға ла йөрөйбөҙ, яңы дуҫтар табабыҙ. Был беҙҙең өсөн бик әһәмиәтле мәсьәлә. Шулай уҡ республикала булған барлыҡ милли үҙәктәр менән үҙ-ара татыу, дуҫ йәшәйбеҙ, байрамдарҙы бергә үткәрәбеҙ. Төрлө кимәлдәге власть органдары менән дә тығыҙ бәйләнештәр булдырылған. Башҡортостан хәҙер инде тыуған йортобоҙға әйләнде, ә кеше тыуған йорто өсөн бары тик яҡшы ғәмәлдәр генә эшләргә тырыша. Беҙ ҙә үҙебеҙҙең ҡаҙаныштарыбыҙ, еңеүҙәребеҙ менән республиканың ҡеүәтен үҫтереүгә өлөш индерәбеҙ. Башҡортостан чечендары араһында мәҙәниәт өлкәһендә лә, фәндә лә уңыштарыбыҙ, мәҫәлән, медицина өлкәһендә - фән кандидаты, юриспруденция буйынса фән докторыбыҙ бар. Бармаҡ менән генә һанарлыҡ булһа ла, уларҙың булыуы шарт. Был шәхестәрҙе беҙҙең Башҡортостаныбыҙ тәрбиәләгән. Шулай уҡ техник вуздарҙа ла уҡытыусыларыбыҙ эшләй. Шуға ла республиканың иҡтисади ғына түгел, интеллектуаль ҡеүәтен үҫтереүгә Башҡортостан чечендары ла үҙ өлөшөн индерә, тип ҙур ышаныс һәм ғорурлыҡ менән әйтәм.

**(Дауамы 2-се биттә).**

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ...

# БЕР-БЕРЕБЕҘГӘ ҠАРАТА...

## иғтибарлы булырға ла өйрәтә

**"Киске Өфө" гәзите халҡыбыҙ өсөн тәғәйенләнгән иң мөһим ижтимағи-сәйәси-мәҙәни баҫма. Ул тәү сиратта туған телебеҙҙә баҫылған гәзит булараҡ әһәмиәтле.**

Баҫма биттәрендә Өфөлә, республикала барған хәл-ваҡиғалар тураһында, халҡыбыҙҙың тарихына, рухи ҡомартҡыларына ҡағылышлы бик файҙалы мәғлүмәттәр бирелә. Гәзиттең һәр бите билдәле бер темаға арнала, шуға һәр кем үҙенә кәрәкле мәғлүмәтте тиҙ генә табып уҡый ала, был бик уңайлы. Мәҫәлән, миңә тәү сиратта яңылыҡтарҙы белеү кәрәк икән, мин тиҙ генә икенсе-өсөнсө биттәрҙәге "Нимә? Ҡайҙа? Ҡасан?" тигән рубрикалағы мәғлүмәткә күҙ һалам. Тарих уҡытыусыһы булғас, мине һис шикһеҙ баҫманың етенсе битендә урын алған "Тарихнамә" рубрикаһы ҡыҙыҡһындыра. Шулай уҡ ғаилә мөнәсәбәттәре, бала тәрбиәһенә ҡағылышлы мәҡәләләр ҙә бик фәһемле, уйланырға мәжбүр итә. Мәғариф өлкәһендәге хәл ителәһе мәсьәләләргә ҡағылышлы, педагогтарҙың эшмәкәрлеген сағылдырған мәҡәләләр ҙә иғтибарҙан ситтә ҡалмай.

Бөтә нәмә үҙенсәлеген юғалтып, бер төрлөлөккә күсә барған заманда "Киске Өфө" гәзите башҡорт халҡының милли йөҙөн, рухиәтен һаҡлап ҡалыуҙы маҡсат иткән баҫма булып ҡала. Уның һәр һөйләме милләттәштәрҙе һиҫкәндерә, уйланырға, аҡыллы һүҙгә ҡолаҡ һалырға мәжбүр итә. Йыш ҡына халыҡтың тарҡаулығы тураһында ишетергә тура килә бит. Ә "Киске Өфө" гәзитендәге һәр мәҡәлә бер-беребеҙгә ҡарата иғтибарлы булырға, үҙ башҡортлоғон уңышын күреп һоҡланырға, милләтте борсоған проблемаларға битараф ҡалмаҫҡа өйрәтә. Шуға күрә уның "Заман башҡорто", "Зыялылар майҙаны", "Килешмәйем", "Тураһын әйткәндә", "Әйт, тиһәгеҙ...", "Ишара" рубрикалары һәр саҡ уҡымлы.

**Азат МӨХӘМӘТЙӘРОВ,**
**Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатының тарих уҡытыусыһы.**



12+

✓ *"Башҡортостанда йәшәйем!" тигәндә оло ҡыуаныс кисерәм. Ошо күп милләтле төбәктә 29 йыл йәшәйем һәм ошо ваҡытта бер тапҡыр ҙа кемделер милләтенә, диненә ҡарап ҡыйырһытыу күренешен күргәнем булманы.*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!



# МОХТАЖЛЫҠТА ЙӘШӘҮ ОЯТ...

**"Бәхет аҡсала түгел, ә уның күләмендә", тигән фекер бар. Уйынлы-ысынлы ҡабул ителһә лә, йөкмәткеһе бик үткер һәм дөрөҫ, минеңсә. Күңел, хәҡиҡәт һәм башҡа ошондай хис-тойғолар тураһында күпме генә һөйләмә, ашамайынса-кейенмәйенсә көн итеп булмай. Шуға күрә күңел бөтөнлөгө һәм тыныслығы менән бер рәттән, кеҫә ҡалынлығын да ҡайғыртыу бурысы ята һәр кемдең иңендә. Был айырыуса ғаиләле ир-егеттәрҙең тәүбурыстарының береһе. Ни тиһәң дә, халҡыбыҙҙың "Барлыҡ враштыра, юҡлыҡ талаштыра", тигән тағы ла бер тапҡыр әйтелгән мәҡәләһе лә бар бит әле.**

Мин сығышым менән Урал аръяғы райондарының береһенән. Ғаиләм менән баш ҡалаға килеп, үҙ урыныбыҙҙы табырға, үҙ мөйөшөбөҙҙө булдырырға тырышыуыбыҙға 5 йыл тирәһе. Кәләш быйыл ҡулына диплом алды, ләкин бала бәләкәй булыу сәбәпле, эшкә урынлаша алманы. Шуға күрә, аҡса табыу, ғаиләмде бөтә яҡлап тәьмин итеү, ҡуртымға алып торған фатирға түләү - минең өҫтә. Өфө төҙөлөштәренең береһендә эшләп йөрөйөм, ләкин нисек кенә тырышһаҡ та, аҡса мәсьәләһен хәл итеү ауырға төшә. Был ситуация бер минең ғаилә менән генә түгел икәненә иманым камил, күпселек дуҫтар шулай осон-оҫҡа ялғап йәшәп ята. Барлыҡ таныштонош егеттәр ҙә төп эшенән тыш ниндәй ҙә булһа өҫтәмә килем алыу юлын табып бөткән. Кемеһе ял көндәре таксиҙа елдерә, икенсеһе электр эштәре менән булыша һәм башҡа төрлө ысул ҡулланып, аҡса эшләйҙәр.

Ғаиләм менән аҙна һайын тиерлек ауылға ҡайтып торабыҙ. Кире киткәндә студенттарҙың, башҡа ауылдаштарҙың атай-әсәйҙәре мотлаҡ рәүештә берәй сумка әйбер ебәрергә тырыша. Бар, автомобиль багажнигы резина түгеллеген аңлатып ҡара һин уларға, теләһәң ни эшлә, ләкин күстәнәсте һыйҙыр. Берәй йыллап ошо рәүешле машинамды һыта яҙып әйбер ташығандан һуң, тағылмалы арба һатып алдым да, ауылдан килгән һайын күбәләй итеп сумкалар тейәп киләм. Бер сумка әйбер ебәрәләр икән, 200 һум алам. Бер тоҡ картуф тейәйҙәр икән - 300 һум. Әгәр ҙә әйберҙәре күберәк булһа, тәбиғи, ҡыйбатыраҡ хаҡ ҡуям. Сумкаларҙы башҡаса бушлай алып йөрөмәйәсәгем тураһында ҡыйынһынып ҡына әйтһәм дә, бер кем дә йөҙ йыйырманы, ризаһыҙлыҡ белдермәне. Беренсенән, хәҙер берәү ҙә улына йә ҡыҙына ни рәүешле ит, картуф һәм башҡа әйбер ебәреү тураһында уйлап баш ватмай. Икенсенән, элекке кеүек, сумка артыҡ ҙур булып китмәһен өсөн нимәне һалайым да, нимәне ҡалдырайым икән, тип уйламайҙар - барыһын да тейәйҙәр. Бер ҡайтып килгәндә кәмендә 3000-5000 аҡса эшләйем. Әҙ тимәҫ инем, сөнки эш хаҡына тиклем өҙлөгөп киткәндә бик тә ярап ҡала. Бәлки, минең миҫал кемдеңдер ҡолағына уралыр һәм әҙме-күпме аҡса эшләү ысулы булыр. Аҡса эшләргә тырышыу оят түгел, ғаиләңде мохтажлыҡта көн иттереү оят, егеттәр. Шуны онотмайыҡ.

**Ишдәүләт БАЙБУЛАТОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *"Мин Башҡортостанда йәшәйем!" тигәндә ниндәй тойғолар кисерәһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Сапармурат ШАНГЛИЕВ, БР-ҙың "Берҙәмлек" Төркмән милли-мәҙәни үҙәге төбәк йәмғиәт ойошмаһы рәйесе, Бөтә донъя төркмәндәре ассоциацияһының Башҡортостан бүлеге етәксеһе:*** "Башҡортостанда йәшәйем!" тигәндә оло ҡыуаныс кисерәм. Ошо күп милләтле төбәктә 29 йыл йәшәйем һәм ошо ваҡытта бер тапҡыр ҙа кемделер милләтенә, диненә ҡарап ҡыйырһытыу күренешен күргәнем булманы. Киреһенсә, милли-мәҙәни үҙәктәр үткәргән байрам сараларында бар милләт һәм халыҡ вәкилдәре бер булып ҡатнаша, күңел аса. Берәү ҙә башҡа милләттәргә: "Бында нишләп йөрөйһөң, был бит һинең байрамың түгел",- тимәй. Республикала, ысынлап та, бар халыҡ бер булып байрам да итә, ауыр ваҡыттарҙа бер-береһенә ярҙамға ла ашыға. Әлбиттә, ғаилә ғәрипһеҙ булмай, тигәндәй, кире күренештәр ҙә осрап ҡуя. Ләкин насар уйлы кешеләр килеп сыҡһа, уларҙы тәрбиәләргә, үҙебеҙ ҙә яҡшы булырға, башҡаларҙа ла яҡшылыҡ күрергә тырышабыҙ.

Башҡортостан тигән гөлләмәнең бер сәскәһе булараҡ, республиканың үҫешенә өлөшөбөҙҙө индерергә, уның мәҙәниәтен үҙебеҙҙең ҡатнашлығыбыҙ менән байытырға, һәр сарала булырға тырышабыҙ. Әйткәндәй, 1 октябрҙә генә Якутов исемендәге паркта Төркмәнстандың үҙаллылығының - 25, "Берҙәмлек"тең 15 йыллығын билдәләп, байрам ойошторҙоҡ. Ошо йылдар эсендә үҙебеҙҙе тиңдәр араһында тиң тойоп йәшәйбеҙ һәм үҙебеҙҙең яҡтан да республикабыҙға файҙалы эштәр эшләргә тырышабыҙ.

***Шолом КАЦ, БР-ҙың "Кохав" йәһүд ижтимағи ойошмаһы рәйесе:*** Нисек кенә сәйер булмаһын, уҙған быуаттың 50-се йылдарында Львов ҡалаһында белем алдым. Ләкин ул минең өсөн яҡын була алманы. Ә бына Башҡортостан... Бөтөн ғүмерем ошонда үтте һәм йәһүд ижтимағи ойошмаһы етәксеһе булараҡ, үҙемде бында сит кеше итеп тоймайым, тиер инем. Шуға ла: "Башҡортостанда йәшәйем!" - тигәндә, үҙемде өйөмдә, ысын өйөмдә тип тоям. Үҙ кеше булыуыңды, үҙ өйөңдә булыуыңды тойоу - кеше әйтә алған иң мөһим һүҙҙәрҙәр, моғайын.

Шул уҡ ваҡытта беҙ генә түгел, башҡа милли-мәҙәни үҙәктәр вәкилдәре лә шулай тип әйтеүе мөмкиндер, сөнки улар менән бер туғандай, ҡулға-ҡул тотоношоп нисәмә йылдар эшләйбеҙ, низағлашыу түгел, хатта һүҙгә килешкәнебеҙ ҙә юҡ. Был да мөһим мәлдәрҙең береһе.

"Беҙ - башҡортостандар" тигән журнал сығарам һәм уның 2-се һанында республикалағы төп өс конфессия - ислам, православие, иудаизм - башлыҡтарының мәҡәләләре донъя күрҙе. Ошо баҫманы башҡа төбәктәргә алып барһаҡ, барыһы ла "Нисек итеп берлектә журнал сығара алдығыҙ?" тип аптырайҙар. Бының сере ябай - республикала милләт-ара һәм конфессия-ара хеҙмәттәшлек бик яҡшы ҡуйылған һәм юғары кимәлдә алып барыла, мәсет, сиркәү менән бер рәттән, синагогаға ла урын табыла, уның булыуы бер кемгә лә ҡамасауламай. 2013 йылда Блюхер урамында синагоганың яңы бинаһын астыҡ, тантанала ҡатнашыусы Рәсәй раввины уны "Европала иң мөһәбәте" тип билдәләне. Был да милләтемдең Башҡортостанда үҙ өйөндә тип хис итеүен раҫлауҙың бер сағылышы.

**З. ӘЙЛЕ яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә.**




Октябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән бер кеше **"Антология поэзии Башкортостана"**, 2 кеше **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры"**, 1 кеше **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 1 кеше **"Башкирские исторические предания и легенды"**, 1 кеше **"Әхмәтзәки Вәлиди"**, 10 кеше 2017 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

**Почтальондар иғтибарына!** Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең егәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләмәксебеҙ. Иң күп "Киске Өфө"гә яҙҙырыусы почта хеҙмәткәрҙәрен бүләктәр көтә.

**Энтузиастар иғтибарына!** Туғандарығыҙҙы, таныштарығыҙҙы, хеҙмәттәштәрегеҙҙе һәм ауылдаштарығыҙҙы "Киске Өфө"гә яҙҙырып, редакцияға 10 квитанция күсермәһе ебәргән дуҫыбыҙҙы ла матур бүләктәр менән шатландырмаҡсыбыҙ.

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓БР Башлығы Рөстәм Хәмитов Индонезияның Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Мөхәммәт Вәхит Суприяди менән осрашты. 2015 йылда Башҡортостан менән Индонезия араһындағы тышҡы сауҙа әйләнеше күләме 1,5 миллион доллар тәшкил иткән, ошо сумманың төп өлөшө беҙҙең республикаға тура килә. Башҡортостандан Индонезияға синтетик каучук, турбореактив двигателдәр һәм монофенолдар оҙатыла. Беҙгә күн әйберҙәр, ҡорамалдар, кейемһалым һәм башҡа продукция килтерелә.

✓"Сочи-2016" халыҡ-ара инвестиция форумында республика делегацияһын Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов етәкләне. Сара 29 сентябрҙән 2 октябргә тиклем уҙҙы. Төбәк етәксеһе дәүләт идара итеүенең яңы сифатына арналған форумдың пленар ултырышында ҡатнашты һәм Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Стратегик үҫеш һәм өҫтөнлөклө проекттар буйынса совет президиумы ултырышында сығыш яһаны. Уны Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев алып барҙы.

✓Өфө тимер юл вокзалы "Рәсәйҙең транспорт хәүефһеҙлеге-2016" конкурсында Ҡаҙандан ҡала икенсе урын яуланы. "Станцияның бөтә биналары, вокзал яны майҙандары һәм перрондар видеокүҙәтеү камералары менән йыһазландырылған. Бында тәүлек әйләнәһенә полиция һәм шәхси һаҡ агентлығы хеҙмәткәрҙәре дежур итә. Беҙ көн һайын 40-тан ашыу алыҫ араға йөрөүсе поездарҙы һәм 50-гә яҡын ҡала яны электричкаларын хеҙмәтләндерәбеҙ", - тип һөйләнеләр Өфө вокзалы дирекцияһында.

✓Профилле комитет ултырышында Башҡортостан парламентарийҙары йәшәү минимумын арттырыу тураһында төҙәтмәләрҙе хупланы. Проект 2017 йылда пенсионер өсөн ошо дәүмәлде 8015 һум күләмендә билдәләүҙе күҙ уңында тота. Ошо һандан пенсияға социаль өҫтәмәләр билдәләнә, тип аңлатма бирҙеләр төбәк парламентының матбуғат хеҙмәтендә.

✓Башҡортостан Башлығы Указы менән республиканың 2016 йыл өсөн әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендәге Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына М.В.Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейы директоры Айрат Тереғолов, театр-сәхнә сәнғәтен үҫтереүгә һәм популярлаштырыуға ҙур өлөш индергәне, юғары башҡарыу оҫталығы күрһәткәне өсөн Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры артистары Гөлсинә Мәүлекәсова менән Илдар Маняпов лайыҡ булды.

АҢЛАҒАНҒА – ИШАРА

# ӘҘӘП ХАҠЫНДА ҺҮҘ




- Әллеү, тим, әхирәт, хәлең нисек? Ә-ә-ә, ярай шул. Эйе шул. Эйе, эйе. Ah-ah! Улай икән дә... Ай, Аллаҡайым! Әстәғәфирулла! Шулайҙыр инде... Ишетелмәй, тиһеңме? Ҡайтып барам, тим, Салауаттан. Ҡаланан, тим, ҡаланан. Баҙарға килгәйнем. Юҡ, һеҙгә нисек инәйем, әхирәт, өйҙә бабай көтә бит. Үҙең килерһең әле. Әллеү! Ишетәһеңме? Ҡаҙ йолҡошорға килерһең, тим. Күп түгел быйыл, унау ғына ул. Мин бит... Әллеү! Әхирәт, ҡайҙа юғалдың? Өҙөлдөмө шул? Суҡынғыр икән!..

Уф! Мин енел һулап ҡуйҙым. Ярай бәйләнеш өҙөлдө әле, автобуста йәнәш ултырған апайҙың тауышы башыма ҡаба башлағайны инде. Әхирәте янынан шылтыратып ҡуймаһын, тип, теләп кенә ултырам.

Өфөгә эш менән барғайным. Әле шунан ҡайтып килеүем. Башым ауыртыуын һөйләп аңлатырлыҡ түгел. Таңғы дүрттән аяҡ өҫтөндәмен бит. Баш ҡалаға таксиҙа юллангайным, ҡайтыу иһә маршруткаға ҡалды. Унһыҙ ла Салауатҡа саҡлы ғына булды. Өфө - Салауат автобусында яңғыҙыма ике урын биләп кинәнгәйнем, Мәләүезгә тиклемгә автобуста ошо бер туҡтауһыҙ телефон аша хәбәр һатҡан апай йәнәшемә тура килде. Урынына инеп ҡунаҡлау менән сумкаһынан телефонын һөйрәп сығарып, хәбәрен яра ла башланы. Ауылдағы бабайына шылтыратты, ҡыҙы менән килененең хәлдәрен белеште. Аҙаҡҡы һөйләшеүе әхирәте менән булды. Уның аты-юлы менән һатҡан хәбәренән ҡураһында нисә баш мал, ҡош-ҡорт барлығын, Салауат баҙарындағы хаҡтарҙы, килененә булған мөнәсәбәтен, кейәүенең түрә икәнен самаланым.

Сабыр кешемен дә инде үҙем. Өндәшмәнем. Асыуым ныҡ килһә лә, оло кешене ҡайһылайтып шелтәләп ултырмаҡ кәрәк? Күсеп кенә ултырыр инең, автобус шығырым тулы. Хәйер, уның һөйләгәндәрен водитель дә ишетә, көҙгөнөнән бик йыш беҙҙең яҡҡа күҙ ташлай, тик апайға һүҙ әйтергә ҡыймайҙыр инде йөш егет.

Ярай әле, аҙыраҡ барғас, күршем йоҡлап китте. Мин дә тынысландым. Тик был оҙаҡҡа барманы. Минән алда ултырған йөш ҡыҙҙың телефоны шылтыраны. Оҙаҡ ҡына һөйләште ул. Быныһы инде апай ише яр һалып хәбәр һатмай, мығырҙығы сыға. Күпмелер ваҡыт түҙҙем. Шунан уға башым ауыртыуы хаҡында ипле генә итеп әйттем. "Минеке ауыртмай бит!" - яуабы ошо булды. Икенсе, өсөнсө, бишенсе тапҡыр әйтеүем дә һөҙөмтәбирмәне. Ул, киреһенсә, минә үсләшеп, үҙе бер туҡтауһыҙ шылтыратырға тотондо. Әле бер, әле икенсе кешенең һандарын йыя. Уның хәлен, проблемаларын егермеләп кеше тыңлауында эше лә юҡ! Шул ыңғай ҡысҡырып көлөп тә ебәрә, бөхәскә лә инеп китә. Был һөйләшеүҙәрҙән ҡыҙҙың тормошон, йәшәү рәүешен самаланым. Салауаттан Мәләүезгә килеп еткәнсе ҡолағынан телефон китмәне. Минә мыҫҡыллы ҡараш ташлап, автобустан төшөп ҡалды...

Быңдай хәлдәр аҙым һайын осрап тора. Телефонһыҙ тормошто күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын бит хәҙер. Күп мәшәҡәтте тап шуның аша хәл итергә өйрәнеп бөттөк. Уңайлы, һүҙ ҙә юҡ. Тик бына телефон аша һөйләшеүҙең дә үҙ ҡағиҙәләре барлығын онотоп ебәрәбеҙ. Кемдер ошо ҡағиҙәне һанламай, кеше араһында ҡысҡырып һөйләшә, йәмһеҙ ҡылана икән, ул тик үҙенең тәртипһеҙлеген иҫбатлай, иң тәү сиратта, үҙен хөрмәт итмәй, унан килеп, әҙәп, әхлаҡ ҡағиҙәләрен һанға һуҡмай.

Ни эшләп беҙҙә "Телефондан һөйләшеү тыйыла!", "Шым һөйләшеү һорала", "Тыныслыҡ һаҡлағыҙ!" тигән иҫкәртеү тамғалары бик һирәк урындарҙа ғына күренә икән? Ниңә "Эсмәҫкә!", "Тәмәке тартмаҫҡа!", "Ишеккә ныҡ итеп япмаҫҡа!" тигәндәренә телефонды дөрөҫ ҡулланыу ҡағиҙәләрен дә ҡушмаҫҡа? Кешеләр барыбер уҡыр, иғтибарға алыр ине уларҙы. Бигерәк тә аҡыл, тәрбиә кимәле түбән булғандарға бик тә ярап ҡалыр ине ул иҫкәртеүҙәр. Заманаға һылтанып, оло-ларға һәм ауырлы ҡатындарға урын биреү, ишек асыу, алдан үткәреү, уның өсөн рәхмәт әйтеү кеүек ябай ғына ҡағиҙәләрҙе онотоп барабыҙ...

Шәхсән үҙемә килгәндә иһә, атайәсәй, яҡындарҙың хәлен белешеүҙе күптән тәртипкә һалғанмын. Эштән төшкә ашҡа ҡайтҡанда, йә, киреһенсә, эшкә килгәндә шылтыратып алам. Юл да тиҙерәк үтелә, бүтәндәргә лә ҡамасауламайым...

Тормоштоң яҙылған һәм яҙылмаған ҡанундары бар. Шуларҙы иҫтән сығармаһаҡ ине. Әйләнә-тирәләгеләргә хөрмәт менән ҡарарға, иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға өйрәнһәк ине, тим.

"...Әллеү, тим, әхирәт, хәлең нисек?" Теге апайҙың тотош автобусҡа һыймаҫ тауышы әле булһа ҡолағымда яңғырап киткәндәй була...

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

МАТУР ХӘТИРӘ



# УЛ КҮРКӘМ КӨН

**1990 йылдың иртәһен бөгөнгө һымаҡ һаман иҫләйем. Иртә менән ҡалала ҡар яуа. Шундай һиллек, әйтерһең, тәбиғәт ниндәйҙер бер мөғжизә алдынан тынып ҡалған.**

Иртәнге ете лә тулмаған, әммә халыҡ ул ваҡыттағы Фрунзе урамына 40-сы йорт янына ағыла. Һәр кешенең ҡулында "Ирекле Башҡортостан", "Суверенитет", "Башҡорт теле - дәүләт теле" тип яҙылған плакаттар, әлегә раҫланып етмәгән Башҡортостан флагы. Араларында ҡурай тотоп сығыусылар ҙа бихисап. Йәйләп депутаттар эшкә килә башланы, өмөт, шатлыҡ менән уларҙың күҙҙәренә бағабыҙ, һораулы ҡараштарыбыҙ менән оҙатып ҡалабыҙ.

Бына бер саҡ арабыҙҙан бер әсә ҡулындағы сабый балаһын юғары күтәреп, депутаттарҙың ҡаршыһына йүгереп сыҡты ла: "Депутат ағай, һинән тора баламдың яҙмышы, ул суверенлы ирекле илдә үҫерме, әллә юҡмы? Беҙҙең киләсәккә яуаплы икәнеңде онотма!" - тине.

Оло йыйын башланды. Бал ҡорто умартаһылай геүләп, торған еребеҙҙә тынып ҡалып, депутаттарҙың сығышын тыңлайбыҙ. Тәбиғәт тә беҙҙең менән борсола һымаҡ тойола, ҡояш болот араһына инеп юғала, ҡарлы ямғыр яуа башлай... Әммә йыйылыусыларҙың береһе лә ҡымшанмай, ышыҡ эҙләп ҡасмай, баҫҡан урындарында ҡатып тороуҙы дауам итә. Бына, ниһайәт, урамға ишетелерлек итеп ҡуйылған динамиктан "Йәшәһен суверенлы Башҡортостан!" тигән оран яңғырай. Кемдер илай, кемдер бейей, кемдер йырлай, кемдер ура ҡыҫҡыра. Ҡояш та болот араһынан сығып, йылы нурҙарын һибә. Теҙелешеп, Салауат Юлаев һәйкәленә атлайбыҙ. Салауат һәйкәлен уратып баҫып, йөҙҙән ашыу кеше ҡурайҙа "Урал"ды һыҙҙыра...

Нисә йылдар үтһә лә, суверенитет иғлан ителгән мәлде күңелендә йөрөтөп, уны ҡабатҡабат хәтеренә төшөрөүсе бер мин генә түгелдер. Тарихыбыҙҙағы был күркәм көн башҡорт халҡының көслө рухын һәм азатлыҡҡа ынтылышын тағы бер тапҡыр раҫланы. Оҙаҡ йылдар көтөп, яулап алынған үҙаллылыҡ Башҡортостаныбыҙға күп ҡаҙаныштар алып килде. Улар тураһында һөйләп тормайым. Әммә календарҙағы был байрамдың ҡимммәтен йәштәребеҙ ҙә аңлап етһен ине, тим. Сөнки тап улар иңенә ирек һөйөүсән халҡыбыҙҙың киләсәген хәстәрләү йөкмәтелгән. Байрам менән, Башҡортостан халҡы!

**Рита ЯҘЫҠБАЕВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Мәскәүҙә "Башҡортостан" сауҙа йорто иң яҡшы республика продукцияһын тәҡдим итә. Сауҙа йорто "Фуд Сити" үҙәгендә урынлашҡан, уны асыу тантанаһы 7 октябргә билдәләнгән. Мәскәүҙәге магазиндың тәүге тәьминәтселәре - Өфө ит-консерва комбинаты, Апитерапия һәм умартасылыҡ үҙәге, "Карлыман продукты", "Пищепром", "Рощинский", "Миәкә" предприятиелары, шәхси эшҡыуар Әпсәләмова (дебет шәлдәр бәйләү).

✓Башҡортостандағы 12 гимназия һәм лицей илдең иң яҡшы 500 белем биреү ойошмаһы исемлегенә инде. Улар 2015-2016 уҡыу йылында юғары һөҙөмтәләр күрһәтте. Исемлектә Өфөләге 39-сы, 64-се, 9-сы һәм 93-сө гимназиялар, шулай уҡ 153-сө лицей, Октябрьскийҙағы 2-се һәм 3-сө гимназиялар, Стәрлетамаҡтағы 3-сө башҡорт лицей-интернаты һәм 1-се гимназия, Салауаттағы 1-лицей, Нефтекамалағы 1-се гимназия һәм 1-се лицей бар.

✓Өфөләге "ВДНХ-Экспо" комплексында асылған "50 плюс. Һаулыҡ һәм оҙон ғүмер" күргәҙмәһендә Пенсия фонды пункты эшләй. Бында Пенсия фондының хеҙмәттәре тураһында ентекле мәғлүмәттәр, шулай уҡ тематик брошюралар менән танышырға мөмкин. Шулай уҡ Рәсәйҙең берҙәм дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр порталында, Берҙәм идентификация һәм аутентификация системаһында теркәлергә мөмкин. Быныһ өсөн паспорт һәм мотлаҡ пенсия страховкаһы таныҡлығы кәрәк.

✓Эш һәм хеҙмәткәрҙәр эҙләү буйынса HeadHunter сайты ошо йылдың III кварталында Башҡортостандағы сайтта урынлаштырылған вакансиялар һәм резюмеларҙы тикшергән. Асыҡланыуынса, вакансиялар һаны буйынса тәүге өс лидер үҙгәрмәгән: "Һатыу", "Банктар" һәм "Етештереү" - 35, 12 һәм 11 процент. Кварталда тәҡдим ителгән иң юғары хеҙмәт хаҡы 150 мең һум булған. Республикала уртаса эш хаҡы - 24,6 мең, Өфөлә 27,5 мең һум тәшкил иткән.

✓"Мәҙәниәттәр диалогы" Бөтә Рәсәй этнолагерында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты аппаратының баш белгесе Марат Ғилманов ҡатнашты. Форум Калуга өлкәһендә уҙҙы. Сарала Рәсәйҙең 60 төбәгенән һәм яҡын сит илдәрҙән вәкилдәр ҡатнашҡан. Проекттың маҡсаты - мәҙәниәт-ара диалог өлкәһендә йәштәрҙең башланғыстарына ярҙам итеү, этномәҙәни күп төрлөлөктө үҫтереү һәм әүҙем ағзаларҙы илдең стратегик ҡарарҙарын әҙерләүгә йәлеп итеү.

***✓ Ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов белдереүенсә, элек ҙур ҡалаларҙың халыҡ-ара ассамблеяһы эше өсөн Рәсәйҙә Мәскәү, Новосибирск, Вологда ғына эш майҙаны булып торһа, хәҙер был исемлеккә Өфө лә ҡушылған.***



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# САЛЮТ БУЛМАҺА ЛА...

**11 октябрҙә республика Башҡортостандың Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеүҙең 26 йыллығын байрам итергә әҙерләнә.**

Сара сиктәрендә 8 - 21 октябрҙә Өфө ҡалаһы райондарының барлыҡ мәҙәниәт һәм ял парктарында, байрам майҙансыҡтарында төрлө саралар үтәсәк, ижади коллективтарҙың һәм башҡарыусыларҙың мәҙәниәт йорттарында һәм һарайҙарында концерт программалары ла ҡаралған. Шулай уҡ тематик осрашыуҙар, кино күрһәтеүҙәр, түңәрәк ҡорҙар, конференциялар, конкурстар һәм күргәҙмәләр ойоштороу планлаштырыла. 11 октябрҙә "Ватан" этнопаркы төп байрам майҙанына әүерeләсәк. Бында "Байрам менән, Республикам!" тамашаһы үтәсәк. Ҡунаҡтарҙы байрам программаһы, республиканың билдәле коллективтары, шул иҫәптән "Мираҫ" фольклор йыр һәм бейеү ансамбле сығыштары көтә. Салауат Юлаев майҙанында спорт майҙансығы һәм әүҙем ял яратыусылар өсөн зоналар булдырыу ҡарала. Уларҙа төрлө спорт төрҙәре буйынса конкурстар һәм ярыштар, спортсыларҙың ГТО тапшырыу буйынса күргәҙмә сығыштары ойоштороласаҡ. Шулай уҡ "Беренсе Май" паркында сәғәт 4-тә "Минең ерем - Башҡортостаным!" тамашаһы, сәғәт 1-ҙә С. Т. Аксаков исемендәге мәҙәниәт һәм ял баҡсаһында "Сәскә ат, Башҡортостаным!" тип аталған концерт, Нефтехимиктарҙың мәҙәниәт һәм ял паркында сәғәт 11-ҙә "Мин был ерҙәрҙә яратам...", сәғәт 1-ҙә И. Якутов исемендәге паркта байрам саралары үтәсәк.

20 октябрҙә сәғәт 3-тә Мостай Кәрим исемендәге скверҙа ла байрам һәм бөйөк шағирҙың тыуған көнөнә бағышланған саралар көтөлә.

Быйыл байрам һуңында салют булмай, тиһәләр ҙә, күрәүегеҙсә, сағыу тамашалар төрлө майҙансыҡтарҙы мәҙәни фейерверк менән балҡытасаҡ.

# "БАШҠОРТТАР" КИТАБЫ



**Өфөлә "Халыҡтар һәм мәҙәниәттәр" серияһында баҫылып сыҡҡан "Башҡорттар" китабының исем туйы үтте.**

Яңы монографияла башҡорттар хаҡында дөйөмләштереүсе материалдар һәм һуңғы йылдарҙағы тикшеренеүҙәр тупланған, был уның фәнни һәм мәғлүмәти ҡиммәтен арттыра. Томды әҙерләү идеяһының авторы - башҡорттарҙы өйрәнеүгә һәм Волга-Урал төбәге халыҡтарын тикшереүгә, этнология фәненә ҙур өлөш индергән ғалим Раил Кузеев. 2000 йылдар башында ул томдың беренсе концепцияһын төҙөй, авторҙар коллективын туплай, материалдар йыйыу һәм текстар әҙерләү башлана. Әммә уның вафат булыуы арҡаһында эш туҡтап ҡала һәм тарих фәндәре докторы Елена Данилко редакцияһы аҫтында 2010 йылда ғына тергеҙелә.

"Республиканың ҙур ярҙам күрһәтеүе арҡаһында китап өс мең дана тираж менән баҫылды, - тип һөйләй Елена Данилко. - Тимәк, уны уҡытыусылар ҙа, мәҙәниәт, музей хеҙмәткәрҙәре лә файҙалана ала, ул китапхана өҫтәлдәрендә һәм башҡорт ғаиләләренең китап кәштәләрендә ҙур урынын табасаҡ. Был - ғалим өсөн иң ҙур награда".

Хеҙмәттә Рәсәй Фәндәр академияһының Н.Н. Миклухо-Маклай исемендәге Этнология һәм антропология институты, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми-тикшеренеү үҙәгенең Р.Ғ. Кузеев исемендәге Этнологик тикшеренеүҙәр институты, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре әҙерләгән.

ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠҠА - ЙӨҘ ОБЪЕКТ

# ТУРИСТАРҒА...

## "ем" бирергә кәрәк



**Бөгөн туристарҙы ылыҡтырырға кәрәк, тибеҙ. Был хаҡта киң мәғлүмәт сараларында ла күп һөйләнелә, әммә буклеттарҙан, ҡағыҙ продукциянан башҡа, "шундай ерҙәр бар", тип күрһәтерлек тәбиғи объекттарыбыҙҙың барыһы ла ситтә, баш ҡаланан алыҫ урынлашҡан.**

Уның ҡарауы, баш ҡалала Урмансылар паркы бар һәм уның территорияһында мин Башҡортостандың ялан, урманлы ялан, урман, таулы урман зоналарының макеттарын күрергә теләр инем. Уларҙың күләмен, дәүмәлен урынға ҡарап хәл итергә мөмкин. Ләкин унда ошо дүрт зонаның барыһы ла сағылыш табырға тейеш: ялан зонаһында ауыл хужалығы сағылыш табып, башаҡтар үҫеп ултыра, комбайндар йөрөй һ.б. Урманлы ялан зонаһында умартасылыҡты күрһәтергә була. Урман зонаһында - урман, урман етештереү буйынса эштәр, урман кәсепселеге күрһәтелергә тейеш. Тау зонаһында - тауҙар, иң матур ҡомартҡыларҙан Ирәмәл, Шүлгәнташ, Мораҙым тарлауығы, Ғәҙелша шарлауығы һ.б. макеты урын алһа, шәп булыр ине.

Өфөгә туристар күп килә. Уларҙы иң тәүҙә ошо паркка сәйәхәткә алып килеп, артабан ҡайҙа барырға үҙҙәре хәл итһә, насармы ни? Бала саҡта белем алыуҙы "Әлифба"нан башлап, Маркстың "Капитал"ына барып еткән кеүек, экскурсияны Өфөнән башлап, зоналар буйына дауам итергә мөмкин. Быны өсөн ошо макеттарҙы эшләтеп, матур итеп урынлаштырырға ғына кәрәк. Балыҡ бит ҡоро ҡармаҡҡа ҡапмай, уны емләргә кәрәк. Был да туристар өсөн "ем" булыр ине, минеңсә.

Үҙем 1986 йылдан бирле Урал буйлап автосәйәхәт итәм. Ҡайҙа ғына булманым,ниндәй генә хәлторошҡа тарыманым, ниндәй генә йәнлектәр, ҡоштар, бөжәктәр, тәбиғәт менән танышманым. Һоҡланып бөтә алмайым. Ғәрәп Әмирлектәре, Төркиәләр ары торһон, беҙгә бөгөн кислородҡа бай таҙа һауа, үҙебеҙҙең урман, тау, ялан мәтрүшкәһе генә кәрәк.

**Илдус ҠОЛҺАРИН.**

АФАРИН!

# ӨФӨ ТӘЖРИБӘҺЕ...

## донъяға таратырлыҡ

**Сентябрь һуңында Өфөлә "Мегаполис: XXI быуат. Ҡала именлеге. Комплекслы ҡараш" VIII Халыҡ-ара форумы үтте һәм БДБ илдәренең Баш ҡалалар һәм ҙур ҡалалар халыҡ-ара ассамблеяһының (МАГ) юғары эксперт баһаһын алды. Әлеге ваҡытта был ойошма составына БДБ-ның 9 иленән 87 ҡала инә.**

Форумда 24 илдән 70 кеше, шул иҫәптән Аҡтау, Тирасполь, Элиста, Нарьян-Мар ҡалалары башлыҡтары, Астана, Дондағы Ростов, Һамар, Ульяновск, Киров, Ставрополь, Новосибирск, Якутск, Сухум ҡалаларының мэр урынбаҫарҙары һәм халыҡ-ара ойошмалар вәкилдәре ҡатнашты. Улар ҡалаларҙың тотороҡло үсешен, милләт-ара һәм конфессия-ара татыулыҡ, экологик һәм ҡала инфраструктураһы эшмәкәрлеге именлеген тәьмин итеүҙе үҙ эсенә алған именлек проблемаһына комплекслы ҡараш буйынса фекер алышты.

Форумды БМО-ның Хабитат мәғлүмәт сессияһы асты. Уның эшмәкәрлеге планетаның һәр кешеһен социаль һәм экологик яҡтан тотороҡло ерҙәрҙә торлаҡ менән тәьмин итеүгә йүнәлтелгән. Сессия йомғаҡтары буйынса БМО-ның Хабитат вәкиле Өфөлә халыҡтың милли һәм мәҙәни мираҫты яратыуы һәм һаҡларға тырышыуы күҙгә ташланыуын билдәләһә, башҡа ҡатнашыусылар ҡаланың спорт инфраструктураһын юғары баһалай һәм был өфөләргә спорт менән шөғөлләнеү, әүҙем тормош алып барыу мөмкинлеге бирә, ти.

МАГ идараһының киңәйтелгән ултырышында фекер ебе Рәсәй ҡалаларын үҫтереүгә инвестициялар йәлеп итеү темаһы тирәләй ҡуйыра. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың МАГ-та Инвестициялар буйынса координация советы ойоштороу тураһындағы тәҡдимен барыһы ла хуплап ҡаршы ала. Шулай уҡ 2017 йылға эш планы һәм Идараның яңы составын һайлау мәсьәләһе лә ҡарала. Ултырыш һуңында ҡаланы үҫтереүгә индергән өлөшө өсөн ҡалала именлек тәьмин итеүсе ведомство һәм учреждениелар етәкселәре бүләкләнә. Сараның һуңғы көнөндәге бүләкләү тантанаһында Өфө ҡалаһы халыҡ-ара форумдың дипломы менән бүләкләнә.

Шулай уҡ ҡунаҡтар баш ҡаланың йәмғиәт, экологик һәм тормош өсөн мөһим булған башҡа именлек талап иткән өлкәләргә комплекслы ҡарашын баһалап, ошо хеҙмәт менән шөғөлләнгән учреждение һәм ойошмаларҙың эше менән танышты. МАГ-тың генераль директоры Владимир Селиванов Өфө тәжрибәһен хатта донъя кимәлөнә сығарырға кәрәк, тип билдәләне.

Ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов белдереүенсә, элек ҙур ҡалаларҙың халыҡ-ара ассамблеяһы эше өсөн Рәсәйҙә Мәскәү, Новосибирск, Вологда ғына эш майҙаны булып торһа, хәҙер был исемлеккә Өфө лә ҡушылған. Белгестәр әйтеүенсә, Башҡортостандың баш ҡалаһының тәжрибәһе үҙенсәлекле һәм ул ассамблеяға инеүсе ҡалалар араһында таратыласаҡ.

**Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы балалар һәм үҫмерҙәр өсөн әҙәбиәт, сәнғәт өлкәһендәге Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы буйынса комиссияның тәүге ултырышы үтте. 2016 йылдың 1 октябренән 31 декабренә тиклем комиссия ошо премияға дәғүә итерлек әҫәрҙәр ҡабул итә. Документтар түбәндәге адрес буйынса тапшырыла: Өфө ҡалаһы, Туҡай урамы, 46, Башҡортостан Башлығы Хакимиәте, 313-сө, 419-сы бүлмәләр. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 280-80-96, 280-80-75.

✓Өфөләге вакансиялар йәрминкәһендә йәштәргә 2500 буш эш урыны тәҡдим ителгән. Өфөләге Халыҡ мәшғүллеге үҙәгендә хәбәр итеүҙәренсә, вакансиялар араһында сауҙа агенты, инженер, администратор, курьер, оператор, менеджер, инспектор, водитель, йөк тейәүсе һәм башҡа һөнәрҙәр булған.

✓Көҙгө саҡырылышта Башҡортостандан 6000 егет илдең Ҡораллы Көстәренә оҙатыла. Шуларҙың 3100 самаһы - Ҡоро ер ғәскәрҙәренә, 230-ҙан ашыуы - Һауа-йыһан көстәренә, 320-нән ашыуы - Хәрби-диңгеҙ флотына, 370-кә яҡыны - Стратегик тәғәйенләнештәге ракета ғәскәрҙәренә, 70-тән ашыуы - Һауа десанты ғәскәрҙәренә, 490 самаһы егет Эске эштәр министрлығының эске ғәскәрҙәренә алына. Егеттәрҙе Ҡоралды Көстәргә оҙатыу 20 октябрҙә башлана.

✓"Әсә" фильмы "Арткино" IX Бөтә Рәсәй ҡыҫҡа метражлы автор киноһы фестиваленең "Тамашасылар фекере буйынса иң яҡшы фильм" номинацияһында еңеүсе булды. Башҡорт фильмы, иң күп тауыш йыйып, 2015 йылдың иң яҡшы ҡыҫҡа метражлы фильмы тип танылды. Уны Башҡортостан Башлығы грантына Шәүрә Шәкүрованың сценарийы буйынса режиссер Айнур Аҫҡаров төшөргән.

✓"Хевел" компанияһының ҡояш модулдәрен етештереү буйынса Яңы Чебоксар заводы Хәйбулла районында Бүребай ҡояш электр станцияһының икенсе сираты өсөн ҡорамалдар тейәүҙе тамамланы. Районда ҡояш электр станцияһының дөйөм ҡеүәте 20 МВт тәшкил итәсәк. Яңы объектты ноябрь аҙағында уҡ файҙаланыуға тапшырыу күҙаллана. Бүребай ҡояш электр станцияһының беренсе сиратын төҙөү быттыр октябрҙә тамамланды.

✔ *Ауыл биләмәһе башлығы ла спортҡа битараф булмаған йәш егет. Ул үҙе греппинг секцияһын алып бара. Хоккей матчтарына барып ҡайтыуыбыҙҙы ла ул ойоштороша. "Халыҡ эскегә генә бирелә күрмәһен", - тип эшләй ул был эштәрҙе.*

*АУЫЛ НИСЕК ЙӘШӘЙ?*

**Бөгөн Башҡортостан Республикаһы көнөнә арналған байрам саралары республиканың һәр төбәгендә үтә. Өфөнөң Орджоникидзе районында ғына, мәҫәлән, 7 октябрҙән 13-нә тиклем 11 байрам сараһы планлаштырылған. Ә район үҙәктәрендә, ауылдарҙа, айырыуса бәләкәй, төпкөл ауылдарҙа халыҡ Республика көнөн нисек, ниндәй мәҙәни һәм спорт саралары менән ҡаршылай? Ҡуңғы һорауға яуап табыу маҡсаты менән беҙ Бөрйән районы Әбделмәмбәт урта мәктәбенең физкультура уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы, билдәле фото-рәссам Зиннур Боҫҡоновҡа шылтыраттыҡ. Ул: "Тап өҫтөнә баҫтығыҙ - байрамға арнап ҡур сара уҙғарырға ниәтләнеп йөрөй инек", - тип, ҡур теләк менән бөтөн уҡыусылар, уҡытыусылар йәлеп ителгән байрам тураһында, шулай уҡ үҙен борсоған ҡайһы бер мәсьәләләр тураһында ла бәйән итте.**

# СПОРТ ҺӨЙӘБЕҘ,

## тимәк, сәләмәтбеҙ



### Суверенитетҡа арнап...

Республика көнөнә арнап, беҙ балалар һаулығын нығытыу һәм күмәк спортты киң йәйелдереү маҡсатында 4 октябрҙә "Һаулыҡ көнө" үткәрҙек. "Һаулыҡ көнө"-нә 1-11-се синыфтың бөтөн уҡыусылары, шулай уҡ мәктәптең бар уҡытыусылары йәлеп ителде. Төрлө эстафеталар, спорт уйындары ойоштороҙоҡ. Мәҫәлән, егеттәр футбол, стритбол уйнаһа, ҡыҙҙар - волейбол, пионербол буйынса көс һынашты. Стритбол тураһында ентекләберәк аңлатып үтәйем. Стритбол, халыҡсан тел менән әйткәндә, урам баскетболы. 1950 йылдарҙа АҠШ-тың ярлы кварталдарында уйлап сығарылған. Ҡәҙимге баскетбол майҙанының яртыһы дәүмәлендәге майҙанда уйналған был уйында уйынсылар һаны ла баскетболдағынан әҙерәк - 6 ғына кеше. Беҙ үҙебеҙҙең стритбол майҙансығын тимер селтәр менән уратып алдыҡ, асфальт түшәнек. Бик һаҡ ҡына итеп уйнарға тура килә. Был спорт төрө балаларҙа, үсмерҙәрҙә айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты: йәй буйы кеше өҙөлмәне. Туптарыбыҙ ҙа күп, туҙып тора, урынына яңыһын биреп торабыҙ. Хәүефһеҙлек мәсьәләһе лә уңышлы хәл ителгән: һәр майҙансыҡта камералар тора. Улар төндә майҙансыҡтың бөтөнләгән насар уйлы кешеләрҙән һаҡлауға булышлыҡ итә.

### "Салауат Юлаев" клубы менән хеҙмәттәшлек

Беҙҙең ауылдың үҙенең хоккей клубы бар - өлкәндәр ҙә, кеселәр ҙә уйнай. 4-5 команда йыйыла. Ҡыш буйы шул майҙансыҡтан сыҡмайбыҙ. Майҙансыҡ төндә ут менән яҡтыртыла. Был да үҙебеҙҙең көс менән эшләнде. Бер ниндәй партия ла ярҙам итмәне ("Берҙәм Рәсәй" партияһы ярҙамы тураһында аҙағыраҡ һүҙ булыр) - 4-5 көн эсендә тауҙың битләүендә майҙан һөрөп, ерҙе тигеҙләп, хоккей ҡумтаһы эшләп тә ҡуйҙыҡ. Ауыл егеттәре, эшҡыуарҙар ҙа ярҙам итте. Аллаға шөкөр, эшҡыуарҙарыбыҙ күп. Стритбол майҙансығын да ошо егеттәр менән эшләп ҡуйғайныҡ. Был эшкә беҙҙең мәктәп директоры Инсур Рәмил улы Үтәбаев та ыңғай ҡарашта. Үҙе лә хоккей ярата. Беҙҙең барлыҡ башланғыстарҙы күтәрмәләп тора. Әйткәндәй, ул беҙҙең мәктәп балаларын роботтар төҙөргә өйрәтә. Беҙҙең мәктәптең йәш уйлап табыусылары роботтар төҙөү буйынса Рәсәй, республика кимәлендәге ярыштарҙа, олимпиадаларҙа уңышлы сығыш яһай...

Мәктәп эргәһендәге хоккей майҙансығы яҙғы, йәйге, көҙгө айҙарҙа ла буш тормай - балалар рәхәтләнеп футбол уйнай.

Ауылдың үҙ стадионы ла бар хатта - ул йылға буйында матур урында урынлашҡан. Байрамдарҙы ошо стадионда үткәрәбеҙ. Матди-техник базанан тыш, рухи тәрбиә мотлаҡ икәне, шуныҙ алға ҡуйған маҡсатты тормошҡа ашырып булмауы барыбыҙға лә мәғлүм. Шунлыҡтан, спортта яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән уҡыусыларыбыҙҙы дәртләндереү сараларын да уйлап сығарып ҡына торабыҙ. Мәҫәлән, балаларҙы яратҡан командаларыбыҙ - Өфөнөң "Салауат Юлаев" хоккей клубының уйындарына алып барып, хоккей матчтарын бушлай күрһәтәбеҙ, Өфөнөң иҫтәлекле урындарына экскурсиялар ҙа ойоштораБыҙ. Яңыраҡ баш ҡалаға республика, ил кимәлендәге ярыштарҙа уңышлы сығыш яһаған бәләкәй балаларҙы алып барҙыҡ. Республика көнө байрамынан һуң яҡынраҡ кластарҙа уҡыусы балаларҙы ла Өфөгә - милли батырыбыҙ исемен йөрөткән хоккей командаһының уйынына алып барырға ниәтебеҙ бар. Бындай эштәр биш минут эсендә генә ойошторолмай - команда етәкселеге, вәкилдәре менән эшлекле бәйләнештәр, килешеүҙәр булдырыу өсөн үҙебеҙгә тырышырға тура килә. Ауыл биләмәһе башлығы ла спортҡа битараф булмаған йәш егет. Ул үҙе греппинг секцияһын алып бара. Хоккей матчтарына барып ҡайтыуыбыҙҙы ла ул ойоштороша. "Халыҡ эскегә генә бирелә күрмәһен", - тигән маҡсат менән эшләй ул был эштәрҙе.

### Дәрес бөткәс - эш бөттө, түгел

Беҙҙең спорт залыбыҙ бер ваҡытта ла буш тормай. Ауылды үҙгегеҙ белеп тораһығыҙ, балалар ҙа, үсмерҙәр ҙә, йәштәр ҙә, урта йәштәгеләр ҙә - һәр ваҡыт бында ла ынтыла. Хеҙмәт кешеләре ауыр эш көнөнән һуң бында килеп, әүҙем ял итә. Ҡышын да, көҙөн дә кеше өҙөлмәй. Ауылдың спартакиадалары үтеп тора. Ауылдар араһында ярыштар...

Дәрес бөткәс - эш тә бөттө, тип, ҡул ҡаушырып, өйҙә ултырыу беҙҙең өсөн ят күренеш. Дәрес бөткәс, төп эшебеҙ башлана ғына: көнөнә 4-әр, 5-әр күнекмәләр ойошторола. Балаларға күнекмәләр үткәрергә кәрәк. Шунһыҙ, маҡсатҡа өлгәшермен тимә. 2013-2014 уҡыу йылында беҙ спортты һәм олимпия хәрәкәтен ойоштороу буйынса республикала иң яҡшы мәктәп булараҡ танылдыҡ. Икенсе йылына, 2014-2015 йылғы уҡыу йылында, ошо уҡ конкурстың Рәсәй беренселегендә үҙ көсөбөҙҙө һынап ҡарарға булдыҡ. Унынында ла еңдек тә ҡуйҙыҡ. Һөҙөмтәлә, "Берҙәм Рәсәй" фирҡәһе спортзалыбыҙҙы төҙәкләндереүгә аҡса бүлде.

Балаларҙы ҡыҙыҡһындырыуға ла күп иғтибар бүләбеҙ. Яңы шөғөлләнә башлаған уҡыусыға алдан уҡ иҫкәртеп ҡуям: "Һин ошо төр менән шөғөлләнә башланың, тырышып күнекмә үт, мин һине республика ярыштарына алып барасаҡмын. Унда еңеп сығаһың икән - Рәсәй кимәлендәге ярышҡа эләгәһең. Шуның өсөн тырышаһың", - тим, район ярыштары тураһында әйтеп тә тормайым. Был һүҙҙәр бик ныҡ тәьҫир итә балаға. Алға ынтыла торған маҡсат ҡуйыла бит.

### Йылғабыҙ һай булһа ла...

Йөҙөүҙе лә ҡалдырмайбыҙ. Автобусҡа ултырабыҙ ҙа, беҙҙән 50 саҡрымда ятҡан район үҙәгенә барып етеп, бассейнда шөғөлләнеп, кире ҡайтабыҙ. Үҙебеҙҙә йылға һай булғанға күрә, һыу инерлек мөмкинлек юҡ. Шуға ҡарамаҫтан, йөҙөү буйынса районда ла беренсе урындабыҙ. Былтыр республика беренселегендә 4-се урын яуланыҡ. Физкультура-һауыҡтырыу комплексы етәкселеге менән алдан һөйләшеп ҡуйғанмын:"Барыбер район данын яҡлайбыҙ, балаларҙы республика ярышына әҙерләйем, егеттәргә, ҡыҙҙарға бушлай шөғөлләнеүҙе ойоштораһыҡ", - тинем. Тәүҙә бассейнда шөғөлләнеүҙе ярты хаҡына төшөртә алһаҡ, хәҙер иһә - бушлай йөҙәбеҙ. Мәктәп автобусына юллыҡ сығымды иһә балаларҙың ата-әсәләре үҙҙәре күтәрҙе - мәктәптән аҡса алманыҡ. Теләгән ваҡытта район үҙәгенә барып ҡайта алабыҙ. Ата-әсәләр ҙә риза булып ҡына тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Балалар урамда тик йөрөмәһен өсөн тырышып йөрөгән баш", - тип, һүҙен йомғакланы Зиннур Боҫҡонов. Ысын уҡытыусы һүҙе бит был. Хәйер, мәғариф өлкәһе ошондай кешеләр тырышлығы менән йәшәп килә лә инде. Ошондай кешеләр арҡаһында Ер ҙә күсәренән сығып осмайҙыр әле. Югиһә...**

**Иҙел РӘХИМОВ.**

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы

**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Аяҡ тирләһә

❖ Алма йәки шарап һеркәһенә манылған мамыҡ менән эшкәртеп, аяҡтарҙың тирләүен дауалаһығыҙ.

### Тын ҡыҫылыуы

❖ Тын ҡыҫылыуҙан ҡотолоу өсөн 100 мл нашатыр спиртына 1 ҡалаҡ әнис майы, ярты литр араҡы өҫтәп, көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 20-30 мл йылы һыуға 7 тамсы өҫтәп эсегеҙ.

### Геморрой

❖ Март айында йыйылған ерек ҡайырыһын сәй кеүек бешереп, иртәле-кисле ашағандан һуң эсергә.

### Туберкулез

❖ 2 ҡалаҡ эт ҡарағаты (паслен черный) емештәренә 1 стакан һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә, 7-8 минут талғын утта ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1/3 стакан эсергә. Был дауа туберкулездың артабан аҙыуына мөмкинлек бирмәй.

### Арпа бутҡаһы

❖ Арпа ярмаһы (перловка) оҙаҡ бешә, шуға ла хужабикәләр уны бешереп бармай. Әммә был ярма файҙалы матдәләргә бик бай. Ярманы бер тәүлек ебетһән, шул тиклем йомшара, хатта бешереп торорға ла кәрәкмәй. Бындай бутҡала бөтөн биологик әүҙем матдәләр һаҡлана, бигерәк тә хәлһеҙләнгән организмға килешә. Ярманы ебеткәнгә тиклем һәм ебеткәндән һуң яшылап йыуырға кәрәк. Арпа бутҡаһы тәбиғи антисептик, организмды аҡһымға байыта. Артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға теләүселәргә был бутҡаға өҫтөнлөк бирергә була.

### Тире ҡоро булһа

❖ Тире ҡоро булып, ярылып торһа, ярты стакан һыуҙа 3 ҡалаҡ глицерин, бысаҡ осонда ғына бура (натрий тоҙо), 1 балғалаҡ нашатыр спирты һәм бал өҫтәп, иртәле-кисле тирегә һөртөргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Халыҡта үҙенсәлекле дауалау ванналары ла билдәле. Мискәгә төрлө үлән-япраҡ һалып, ҡайнар һыу ҡойғандар. Ошолай әҙерләнгән төнәтмәгә ауырыу кеше төшөп ултырған. Ҡышын бындай ванналы ямғыр теймәгән бесәндән яһағандар. Ҡырмыҫҡа иләүенән дә ванна әҙерләү билдәле. Бер биҙрә ҡырмыҫҡа иләүен мискәгә һалып, ҡайнар һыу менән бешекләгәндәр ҙа, барлыҡҡа килгән төнәтмәлә дауаланғандар. Яңы һуйылған мал тиреһенә уранып ятыу һымаҡ физиотерапия ла билдәле. Был бик көслө дауа тип иҫәпләнгән һәм башҡа саралар ярҙам итмәгәндә генә ҡулланылған.

Күп кенә халыҡтарҙағы кеүек башҡорттарҙа ла мунса инеү бик шифалы тип һаналған. Тән, аяҡ-ҡул һыҙлағанда, һыуыҡ тейҙереп сирләп киткәндә мунса инергә тырышҡандар.

Халыҡ физиотерапияһының сикле дауалау формаһы ла билдәле. Мәҫәлән, сийан сыҡҡанда, теш һыҙлағанда дуалау нәҡ ошо урынға йүнәлтелгән. Йылытылған көл, ҡом, аш тоҙо, көрпә, иген бөртөктәре туҡымалан тегелгән бәләкәй ҡапсыҡҡа һалынып, йылытҡыс яһалған. Уны ауыртҡан ергә ҡуйғандар.

Баштың бер урыны ғына ауыртҡанда һары майҙы йылытып, борсоған урынға тамыҙғандар һәм өҫтөнән бәйләп ҡуйғандар. Ошолай йылытыу йыш ҡына сирленең хәлен яҡшыртҡан. Бында ауыртыуҙың сәбәбе ҡан тамыры ҡыҫылыуға ҡайтып ҡалғандыр. Ә йылытыу ҡыҫылыуҙы бөтөрә.

Тән тартышыуҙан ҡотолоу өсөн ҡарағай, ҡарағас һәм ширшы ылыҫына артыш ботаҡтарын ҡушып, дауа ваннаһы яһағандар. Шешенеүҙе бөтөрөү өсөн зарарланған ергә эҫе һыуҙа бешекләнгән артыш ылыҫы һалынған. Балаларҙың үпкәһе шешкәндә ҡүкрәккә майлы компресс яһалған: йылытылған һары май (һарыҡ йәки йылҡы майы) менән таҙа сепрәкте сылатып, түш тәңгәленә һалғандар, баланы яҡшы итеп урап, өҫтөн япҡандар. Дауалау өсөн ҡайһы берҙә сей килеш тауыҡтың эс майын ҡулланғандар.

Халыҡ Башҡортостан тәбиғәтенең тағы бер шифаһын асҡан. Һүҙ мәмерйә һауаһы менән дауаланыу тураһында бара. Шүлгәнташ мәмерйәһе тирәһендә йәшәгән халыҡ тын ҡурылыу, тын бөтөү, астма һымаҡ сир менән ауырығанда йылы кейенеп, мәмерйә эсендә 1-2 сәғәт ултырып сыҡҡан. Ошолай аҙна-ун көн дауаланғандан һуң ауырыу кәмеүен, һаулыҡтың яҡшырыуын тойғандар.

Башҡорт халыҡ медицинаһында массаж (һылап-һыйпап дауалау) киң ҡулланылған. Эс төшкәндә, ҡатыу алғанда, эсәктәрҙә газ йыйылғанда, йөрәк тулағанда, һөйәк-быуындар һыҙлағанда, быуын сыҡҡанда, бәпесләгән ҡатынға кендек инәй булышҡанда һ.б осраҡтарҙа дауалауҙың бер өлөшө массаж булған.

Массаж үткәрелергә тейеш булған урынға төҙә май һөртөлгән йәки ул урын һабынланған, йылытылған. Эс төшкәндә массажды мунсала башҡарғандар, сөнки ауырыуҙың тәне яҡшы йылынған булған.

Ауыр физик эш эшләгәндә бөтә тән, бигерәк тә бил тирәһе ауыртыусан. Хәлде еңеләйтеү өсөн ҡайһы бер төбәктәрҙә "бил тапатыу" тигән массаж төрө ҡулланылған. Бының өсөн 3-4 йәшлек бала һыҙланған кешенең бил тәңгәленән (умыртҡа бағанаһы йәнәшенән) бер нисә тапҡыр еңелсә баҫып үткән.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**
**(Дауамы бар).**

ӘРМЕГӘ КИТӘ ЕГЕТТӘР

**Сирек быуат тирәһе хәрби табип булып хеҙмәт иткән дәүерҙәге күргән хәлдәрҙе һөйләй башлаһаң, кемдер әйтмешләй, "конца-крайы" юҡ. Ғүмерҙәре әле генә башланған йәш егеттәребеҙҙең һаҡһыҙлығы, йәиһә тыңлауһыҙлығы арҡаһында төрлө бәләләргә юлығыу осраҡтары хаҡында һәм уларҙы киҫәтеү ниәте менән ошо мәҡәләне яҙырға булдым. Әрме хеҙмәтендәге һәр күңелһеҙ ваҡиғанан һуң командирҙы язаға тарттыралар, әлбиттә, ләкин бынан һалдатҡа ла, уның ата-әсәләренә лә бер ниндәй файҙа юҡлығы барыбыҙ өсөн дә асыҡ. Ә бына егеттәребеҙ үҙ ғүмерҙәренә һаҡсыл ҡараһа, бәлки, бына шундай ҡайғылы осраҡтар һирәгерәк тә булыр ине, тигән өмөт менән бер нисә миҫал ярҙамында әрме тормошоноң ошо яғын асып бирмәксемен.**

# ХӘҮЕФҺЕҘЛЕГЕҢ ХАҠЫНДА...

## иң башта үҙең ҡайғырт!



### Өйҙә һине атай-әсәйең көтә...

...Төнгө сәғәт икеләр тирәһендә хәрби госпиталдең дежур хирург бүлмәһендә сираттағы шылтыраған телефон трубкаһын алдым.

- Доктор, фәлән казармала һалдатты ток һуҡҡан, - тине тулҡынланыуынан тотлоға биреп часть буйынса дежурҙағы майор. - Ашығыс рәүештә "скорый" ебәрегеҙ!..

Дежурҙағы фельдшер прапорщик Карауловты ашығыс ярҙам машинаһы менән шунда уҡ әйтелгән казармаға ебәрҙем. Күпмелер ваҡыттан һалдатты госпиталгә алып та килделәр.

- Ҡотҡара алманыҡ, иптәш подполковник, - тип доклад яһаны фельдшер, күрәһең, шул уҡ секундта йән биргән булған...

Оҙаҡламай ҡабул итеү бүлмәһенә, ғәҙәттәгесә, часть командиры, замполит һәм башҡалар йыйылды. Сөнки һалдат ғүмере өсөн иң беренсе нәүбәттә улар яуаплы...

Ә эш былай булған. Төн уртаһында тәмәке тартҡыһы килеп уянған кесе сержант Р. "тумбочка"ла торған һалдатка (рота буйынса дневальный булып тороу һалдат лексиконында шулай тип атала) үҙенең "теко"леген күрһәтергә уйлапмы, өҙөлгән үтек шнурын розеткаға тығып, проводтың ике осон тоташтырыу исулы менән электр осҡоно (короткое замыкание) яһап, тәмәке ҡабыҙмаҡ була. Бәлки, элегерәк тә шулай итеп йөрөгән булғандыр ул, әммә был юлы... Ҡыҫҡаһы, дембелгә ҡайтырға бер нисә ай ғына ҡалған һалдаттың ғүмере шулай аңһыҙ рәүештә өҙөлдө. Ата-әсәләре улдарын килеп алып ҡайттылар. Ә уның һәр кимәлдәге командирҙары, замполит, әлбиттә, үҙ язаһын алды. "За слабую политико-воспитательную работу среди личного состава..." тип, кемеһенендер дәрәжәһен төшөрөп, икенселәренә ҡәтғи шелтә бирелде.

..."Карағыҙ, егеттәр, минең "водовозка" нисек тормоз тотҡанын. Смертельный тормоз!.." Мисҡәнендә ярталаш һыуы булған ауыр "ЗИЛ" ҙур тиҙлектә таш ҡойма буйындағы эскәмйәлә тәмәке тартып ултырған өс "дембел"гә яҡынлаша. Иптәштәренә етергә бер-нисә метр ҡалғас, водитель кинәт тормозға баҫа. Машинаның тормозы, ысынлап та, "смертельный", йәғни тәгәрмәстәр шундуҡ һыҙҙыра башлай. Әммә... Водовозкалағы бер нисә тонна һыу, сайпылып, машинаны кинәт алға этәрә... Бампер өс егетте лә шытырҙатып таш стенаға ҡуша ҡыҫа. Һалдаттарҙың икәүһе шунда уҡ йән бирә. Ә береһен госпиталгә алып килеп еткерәләр. "Был хәлгә тарығанымды белһә, әсәйем аҡылдан шашыр инде..." тигән уның һуңғы һүҙҙәре һаман да ҡолағымда сыңлай. Эйе, ысынлап та тап шул һүҙҙәрен генә әйтеп өлгөрҙө һалдат наркоз алдынан. Ҡатмарлы операция барышында егетте ҡотҡарып алып ҡалыу мөмкин түгеллеге асыҡланды. Арҡа мейеһе, талағы, бауыры бөтөнләйгә иҙелгән, эсәктәре бер нисә урындан өҙөлгән, бик күп ҡан юғалтҡан, ғөмүмән, хирургия теле менән әйткәндә, "травма несовместимая с жизнью". Һалдат башҡаса уянманы... "Тәрбиә эшен насар алып барған" командирҙар, әлбиттә, язаһын алды. Әммә миндә һәм башҡа күптәрҙә, ошо фажиғә өсөн ғәйепте егеттәрҙең үҙҙәрендә генә эҙләү кәрәктер, тигән уй ҡалды...

...Стратегик ракета частарында АСО (Автоматизированная система охраны) тип аталған нәмә бар. Ябай ғына итеп әйткәндә, ракетаның тирә-яғы юғары вольтлы тимер сым селтәре менән әйләндереп алынған. Йыш ҡына унда мышы, төлкө, йәиһә ниндәйҙер берәҙәк эттәр эләгеп үлгеләй ине. Был хаҡта һәр бер һалдат яҡшы белә. Низер килеп эләгеү менән, электр тогы автоматик рәүештә һүнеп тора һәм, эләккән нәмәне алып ташлағандан һуң, ҡабаттан ток ебәрелә. Бына шуны файҙаланып, рядовой Сидоров, дембелгә алып ҡайтырға әҙерләгән әйберҙәрен тимер сым артына "ышаныслы урынға" йәшерә. Токлы сым өҫтөнә ниндәйҙер берәй бүрәнә-маҙар ташлау юлы менән, токты һүндертеп, шул арала әйберҙәрен йәшереп өлгөрөп йөрөгән "тапҡыр" һалдат, өйөнә ҡайтып китер алдынан сетка (токлы сымдарҙан яһалған ҡоролма тап ана шулай тип атала) артынан "дембельсий чемодан"ын алырға була. Әммә... Был юлы ниндәйҙер сәбәп менән автоматика эшләүҙән "баш тарта"... Ысынында күмергә әйләнгән улдарын ата-әсәһе илай-илай тыуған яғына алып ҡайтып китте. Автоматика ғәйеплеме был хәлгә, командирмы, әллә һалдат үҙеме икәнен уҡыусының хөкөмөнә ҡалдырам. Ә әрмеләге йола буйынса барыбер командир ғәйепле булып сыға...

...Әлеге лә баяғы "дембель"гә йыйыныу мәле. Оборона министрлығының яҙғы саҡырылыш һалдаттарын ҡайтарыу тураһындағы сираттағы бойороғо март аҙаҡтарында сыға. Ике егет шул шатлыҡлы датаны автопаркта ҡаршылай. Илебеҙҙең "изге" йолаһына ярашлы, былдай көндә билдәләп тә алмаҡсы булалар. Антифриз менән... (Антифриз - автомобилдең двигателен һыуытырға тәғәйенләнгән, спирт еҫе сығып торған шыйыҡса. Ифрат та ныҡ ағыулы. Кеше өсөн үлемесле доза - 30-50 грамм). Был шыйыҡсаның үлемесле икәнен һәр бер һалдат белә. Уларға хәрби табиптар, командирҙар һәр саҡ был хаҡта занятиелар үткәреп тора. Тик кемдер быға әллә ышанмай, әллә ни... Инде бөйөрҙәре бөтөнләй эшләүҙән туҡталған был ике егетте Екатеринбургтағы округ госпиталенә алып килеп еткерәләр. Әммә, интенсив терапия ла, хатта ваҡытлыса уларға тоташтырылған "яһалма бөйөр" ҙә ярҙам итмәй...

...Полк котельныйында 200 литрлыҡ мискә төбөндә бер аҙ ғына дизель ягыулығы (солярка) тора. Рядовой Мулин, Солодов, Якунин бәхәсләшә-бәхәсләшә шул мискә тирәһендә тәмәке көйрәтә. "Ошо мискәгә шырпы яндырып ташлаһам да ут тоҡанмаясаҡ, сөнки был бензин түгел, ә - солярка", - ти егеттәрҙең береһе. Икенсеһе уның менән риза булмай. Ә өсөнсөһө ике иптәшенең бәхәсенә шаһитлыҡ ҡылырға булып, дөрөҫлөктө иҫбатларға ҡарар итәләр... Янған шырпы мискә төбөнә хатта төшөп тә етмәй, сөнки мискәлә йыйылып торған солярка быуы ялҡынланып, ғәйәт көслө шартлау барлыҡҡа килә. Һөҙөмтәлә егеттәр ауыр яныу йәрәхәте ала. Уларҙың икәүһе госпиталгә алып килеп тә еткермәҫ элек һәләк була. Ә береһе бер нисә ай дауаланғандан һуң, тәнендәге һәм битендәге яра йөйҙәре менән өйөнә ҡайтырыла. Был да командирҙың етешһеҙ тәрбиәһе арҡаһында инде. Һәр хәлдә, дивизия командованиеһы шулай тип ҡарар ҡылды.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**яҙыусы, отставкалағы подполковник.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Беҙ, башҡорттар, нәҡ ошо йылдар эсендә үҙ-үҙен, үҙенең эске берҙәмлеген, үҙенең телен, рухын, мәҙәниәтен яҡлай һәм һаҡлай алырлыҡ милләт булараҡ барыбер өр-яңы юғарылыҡҡа күтәрелә алдыҡ.***



ХӘТЕРЛӘП...

# УЛ ШАНЛЫ ЛА, ДАНЛЫ ЛА ЙЫЛДАР...



**ҺОРАУ: Суверенитет яулау йылдары республикабыҙ, халҡыбыҙ тарихында ниндәйерәк һабаҡтары менән урын алды?**

***Рәшит ШӘКҮР, яҙыусы, филология фәндәре докторы:*** 1990 йылдың 11 октябрендә республикабыҙҙың Юғары Советы Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеп, Башҡортостан тарихының өр-яңы битен асып ебәрҙе. Был көндән һуң уҙған йылдар, дөйөм алғанда, үҫеш, яңырыу һәм бик ҙур үҙгәрештәр дәүере булды. Әммә шул уҡ ваҡытта тотош ил иңенә төшкән, донъяла тиңе булмаған реформалар дәүере аша үтеү беҙҙең республикабыҙ һәм халҡыбыҙ өсөн дә ҙур һынауға әйләнде. Был һынау хәҙер ҙә дауам итә. Йәғни, реформаларҙың ыңғай яҡтары менән бергә, йәнде әсетерҙәй кире яҡтары ла бихисап. Шуның өсөн дә, әгәр ҙә бөгөн суверенитет яулағандан һуңғы йылдарҙағы уңыштарҙы барлау менән бергә, булмышыбыҙҙың теге йәки был өлкәһенә ҡарата тәнҡитле ҡараштар әйтелә икән, был бик тә тәбиғи. Үткәндәрҙе нәҡ шул планда объектив һәм ғәҙел анализлауҙы артабан да дауам итергә кәрәк.

Һүҙ ҙә юҡ, ошо йылдар эсендә халҡыбыҙ һәм республикабыҙ яңы һәм уғата ҡатмарлы шарттарҙа йәшәргә, алға барырға, әленән-әле килеп тыуған проблемаларҙы тыныс һәм айыҡ аҡыл менән хәл итергә өйрәнде. Бына быныһы, минеңсә, иң мөһиме. Беҙ, башҡорттар, нәҡ ошо йылдар эсендә үҙ-үҙен, үҙенең эске берҙәмлеген, үҙенең телен, рухын, мәҙәниәтен яҡлай һәм һаҡлай алырлыҡ милләт булараҡ барыбер өр-яңы юғарылыҡҡа күтәрелә алдыҡ. Беҙ яҙмышыбыҙҙы республикабыҙҙа йәшәүсе бүтән милләт вәкилдәре менән аралашып, аңлашып, республика, Рәсәй закондарын, милләттәрҙең хоҡуҡтарын яҡлаусы халыҡ-ара документтарға таянып хәл итеүгә ынтылдыҡ һәм эшебеҙҙе шул йүнәлештә дауам итәбеҙ. Үткәндәрҙән һабаҡ алып, хаталарҙы һәм етешһеҙлектәрҙе төҙәтеп, өмөт һәм ышаныс менән алға табан барырға насип булһын, туғандар!

***Марат ҠОЛШӘРИПОВ, тарих фәндәре докторы профессор, йәмәғәт эшмәкәре:*** 1990 йылдың 11 октябрендә Дәүләт суверенитеты тураһындағы декларация ҡабул итеү башҡорт халҡының ғына түгел, ә бөтә Башҡортостандың күп милләтле халҡының тырышлығы, үҙаллылыҡҡа булған ныҡлы ынтылышы менән туранан-тура бәйле. Декларация ҡабул иткәндән һуң сәйәси һәм иҡтисади үҙаллылыҡ халыҡтың йәшәү кимәлен күтәреүгә, төрлө социаль мәсьәләләрҙе ыңғай хәл итеүгә киң юл асты. Иҡтисади үҙаллылыҡ республиканың социаль-иҡтисади үҫешенең стратегик юлдарын аныҡлауға, Башҡортостандың һәр йәһәттән ныҡ үҫешкән, тотороҡло субъектҡа әйләнеүенә булышлыҡ итте. Республика үҙаллылығы шул уҡ ваҡытта баҙар мөнәсәбәттәренә күсеү осоронда халыҡты күп кире күренештәрҙән ҡурсалап тороуға булышлыҡ итте. Башҡортостан Республикаһының йәшәүе һәм үҫеүе, шулай итеп, уның күп милләтле халыҡтары ихтыяжы һәм мәнфәғәте менән бәйле икәне бәхәсһеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Үҙәктең ҡайһы бер идара итеүсе даирәләре ошо ысынбарлыҡты аңларға теләмәй, милли республикаларҙы бөтөрөү уйы тураһында хыяллана. Ләкин Үҙәктең милли сәйәсәте илде сыуалышҡа, тарҡатыуға дусар итәсәк. Федераль үҙәк, әгәр ул хоҡуҡи демократик дәүләт төҙөргә теләй икән, федерализм принциптарын яҡлаған тәрән, фәнни нигеҙҙә эшләнгән милли сәйәсәт доктринаһын булдырырға тейеш. Мәсьәлә шулай тора: йә беҙ етди профессиональ һәм фәнни ҡараштарға нигеҙләнеп, милли республикаларҙың төрлө мәнфәғәттәрен иҫәпкә алған һөҙөмтәле федератив демократия ҡороу юлына баҫабыҙ, йә унитар дәүләт төҙөү һуҡмағын һайлап, унитар, бюрократик-бойороҡ биреү идаралығы системаһына кире әйләнеп ҡайтабыҙ. Дәүләт төҙөлөшөнөң был йүнәлештә китеүе ифрат хәүефле: Рәсәй милли республикаларҙы юҡ итһә, ул СССР һымаҡ уҡ тарҡалыуға дусар буласаҡ. Рәсәйҙә федераль ҡоролошто нығытыу һәм үҫтереү халыҡтарҙың үҙбилдәләнешкә булған хоҡуғын таныусы, барлыҡ милләттәрҙең дә үҫешенә гарантия биреүсе берҙән-бер һыналған юл булыуын онотторға ярамай.

***Ғәлинур ҠАЛМУРЗИН, БР-ҙың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре:*** Беҙҙең ерлектә үҙгәреш осоронда йәшәү, киреһенсә, бәхет кенә булды. Әлбиттә, проблемалар, билдәле бер ҡыйынлыҡтар ҙа йәнәш килде, ләкин улары, рухи яңырыш һәм күтәрелеш мәле менән сағыштырғанда, сүп кенә һымаҡ ине. Үҙгәреш осорона тиклем дә, унан һуң да беҙҙең халыҡтың башҡаса шундайын да берҙәм, ойошҡан сағын күрергә насип булманы... Күрәһең, халҡыбыҙҙың күңеле шул тиклем үҙгәрештәргә һыуһаған, тамырҙарында аҡҡан ҡандың ҡайнап, тулышҡан мәле булған. Ҡыҫҡа ваҡытлы бер балҡыш ҡына булып алды ул мәл, үкенескә ҡаршы, ташҡын кире ярҙарына ҡайтты. Уйлап ҡараһаң, халыҡ тормошо гел генә балҡыштарҙан да торорға тейеш түгелдер инде, ә шулай ҙа ғүмер буйы балҡып, ялҡынланып йәшәгән халыҡтар ҙа бар бит донъяла. Уның ҡарауы, быңдай халыҡ үҙе менән иҫәпләшмәүгә, үҙ өҫтөнән "тәжрибәләр" үткәреүгә, кадрҙарын әләф-тәләфләүгә, әсә телен өйрәнеүҙе тыйыуға бер ҡасан да юл ҡуймаясаҡ.

Республикабыҙға үҙаллылыҡ яулап алған ул шанлы көндәрҙән һуң 26 йыл уҙып та китте. Шул йылдарҙа тыуған балалар бөгөн балиғ йәшен үтеп, үҙ аллы тормошҡа аяҡ баҫты. Күңелемде шундай һорау борсой: үҙгәртеп ҡороу йылдары биргән һабаҡтар тураһында беләме улар? Ниҙәр белә? Мин ышанам: халҡыбыҙ яҙмышында тағы ла сағыуыраҡ балҡыштар булыр әле, тик әлегеһен һаҡлап ҡалырға, йәштәребеҙ күңеленә хәҡиҡәт орлоҡтарын сәсеп ҡалдырырға кәрәк.

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районы "Көнгәк" гәзитенең баш мөхәррире:*** Беҙҙә суверенитетты, ғәҙәттә, заводтар, мәктәптәр, дауаханалар, йорттар төҙөлөүе, юлдар һалыныуы кеүек матур үҙгәрештәр менән генә бәйләйҙәр кеүек. Ә бына шул суверенитет һөҙөмтәһендә кеше күңелендә, Башҡортостанға исем биргән халыҡтың күңелендә ниндәй үҙгәрештәр булыуын, уның ниндәй кимәлгә күтәрелеүен уйлағаныбыҙ юҡ шикелле. Иң шатлыҡлыһы шул: халҡыбыҙ вәкилдәре үҙенең кемлеген таный, үҙ тамырҙарын барлай, тарихын өйрәнә, балаларыбыҙ, ейәндәребеҙ үҙ туған телендә уҡый, һөйләшә. Бына быныһы инде милләтебеҙҙе, республикабыҙҙы артабан да һаҡлап ҡалыуҙың нигеҙе. Был Аллаһы Тәғәлә тарафынан беҙгә ебәрелгән азат булыу, бойондороҡһоҙ булыу тәғәйенләнеше. Күпме баҫым яһаһалар ҙа, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдарын күпме язалаһалар ҙа, ҡазалаһалар ҙа, барыбер асылыбыҙға әйләнеп ҡайттыҡ. Беҙ үҙ асылыбыҙға, тамырҙарыбыҙға ҡасан да булһа барыбер ҡайтыр инек, ҡайтырға тейеш инек. Беҙҙең милләт, Әхмәтзәки Вәлиди әйткәнсә, берәү генә ҡалһа ла, аҡтамыр кеүек таралыр, аяғына баҫыр ине. Ә тап 90-сы йылдарҙа үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡлап күтәрелеүебеҙ, башҡа милләттәрҙән алда республикабыҙға үҙаллылыҡ яулап, суверенитетлылар сафының алдында барыуыбыҙ - ошо инде егерме алты йыллыҡ тарихыбыҙҙағы иң ҙур һабаҡ һәм ҡаҙанышыбыҙ.

***Әхтәр БОҪҠОНОВ, сәйәсәт фәндәре докторы:*** Башҡортостан үҙаллылыҡ яулағас, күңелдәребеҙҙә азатлыҡҡа юл асылғандай булғайны. Был йылдар Башҡортостан халҡының милләт булараҡ туплаңыуына ла этәргес булды. Рәсәй закондары туҡтауһыҙ үҙгәреп тороуға ҡарамаҫтан, күңелдәрҙәге өмөт һүнергә тейеш түгел. Республикабыҙҙың яҡты киләсәге өсөн һәр ҡайһыбыҙ үҙ урынында тырышлыҡ күрһәтергә тейеш.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

## БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Һүҙ юҡ, Евразияның, бигерәк тә Урал алды һәм Көньяҡ Уралдағы Урал (Яйыҡ) йылғаһы буйының, этник составы бик ҡатмарлы: Геродот исседондары, дахо-мәсәғүттәр (мәсәғүттәрҙең ул осор батшабикәһе Тамарис ), шулай уҡ күсмә тормош менән йәшәүсе даиктар булған. 1970 йылда дахтарҙы Көньяҡ Урал халҡы тип танығаң ғилми хеҙмәттәр барлыҡҡа килә. Күрәһең, бында дах ырыуы атамаһының Яйыҡ (Урал) йылғаһы менән яңғыраш булыуы нигеҙ итеп алынғандыр. Шулай уҡ "Даи" атамаһы башҡорт телендәге "Даһи" (Бөйөк) һүҙенә лә оҡшаған. Үҙенең аңлатмалы һүҙлегендә В. Даль "Дайга" һүҙенең килеп сығышын Себерҙәге тау түбәһенә бәйләп аңлата, әммә был осраҡта Яйыҡ йылғаһы Уралтауҙан баш ала. Ырымбур башҡорттарының телен өйрәнеүсе С.Ф. Миржанова ырыу-ара бүленешен аңлатыусы "йайыҡ" этнонимын теркәй. Даи (даик) менән йайыҡ этнонимы бер-береһенә ныҡ яҡын. В.В. Бартольд даи (даик) ҡәбиләһенең боронғо төрки телдә һөйләшеүе хаҡында яҙа, уның фекерен С.Е. Малов хуплап сыға һәм иртә тимер быуатында Көньяҡ Уралда йәшәүсе ҡәбиләләр боронғо башҡорт телендә аралашыуын дәлилләй. Бынан тыш башҡорт ғалимы Н.Мәжитов даи-даиктарҙың Көньяҡ Уралдың киң майҙанын үҙҙәренең иҡтисади, сәйәси һәм мәҙәни йоғонтоһо аҫтында тотоуын нигеҙләне. Был фекерен иҫбатлар өсөн ғалим даи-даиктарҙың ювелир иҡтисадының юғары үҫеш кисереүен килтерә, даиктарҙың үҫешкән үҙ дәүләте булған, Филиппов кургандарында табылған алтын боландар коллекцияһы ла уларҙың матди ҡомартҡыһы булып иҫәпләнә (Мәжитов, 2013, 24-37-се, 38-50-се биттәр). Н.Мәжитов үҙенең хеҙмәттәрендә иртә тимер быуатына ҡараған Көньяҡ Урал археологик ҡомартҡыларының башҡаларҙан айырылып тороуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Беҙҙең эраның I- II быуаттарында йәшәүсе даи-даик ҡәбиләләре вариҫтары алдынғы этник төркөм иҫәпләнгән, улар боронғо төрки телендә һөйләшкән һәм уларҙы башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары тип һанарға ла мөмкин. Башҡортостан һәм башҡорт халҡы тарихындағы бындай етди аныҡлама абстракт (уйлап сығарылған) атамалар менән түгел, ә документтар нигеҙендә аныҡ рәүештә нығытылырға тейештер. Был даи-даик ҡәбиләһенә лә ҡағыла. К.Ф. Смирнов иртә тимер быуатында Көньяҡ Уралда йәшәүсе ҡәбиләләрҙе йыйылма даи-даик этноним менән атау яғында. Бындай тәҡдимде Мәжитов буйынса ҡарағанда, "савромат", "сармат" этнонимдарын "даи-даик" ҡа, ә "савромат мәҙәниәте"н даик (Яйыҡ) мәҙәниәтенә үҙгәртеү лаҙым ("Ватандаш" № 4, 2014, 31-38-се биттәр).

**(Дауамы бар).**

# КӨРӘШ, ҡырғыҙҙар

**Хәбәр ителеүенсә, күптән түгел Ҡырғыҙстанда II Бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындары булып үткәйне. Унда Башҡортостан делегацияһы ла барҙы һәм бер нисә уйын төрөндә үҙ көсөн һынап ҡараны. Традицион уҡ атыусылар ярышында "Киске Өфө" гәзите хеҙмәткәре Артур БАТЫРШИН да ҡатнашты. Бер нисә тапҡыр Рәсәй чемпионы, күп тапҡырҙар республиканың абсолют чемпионы исемен яулаусы көрәшсебеҙ, республиканың Милли көрәш, шулай уҡ Билбау көрәше федерациялары президенты Вәкил ИЛЬЯСОВ иһә Уйындарға Башҡортостан көрәшселәрен әҙерләп алып барҙы. Беҙҙекеләр был Уйындарға ниндәй уй-хыялдар менән барҙы ла, ниндәй һығымталар менән ҡайтты икән?**

▸ **Ҡырғыҙҙарҙың икенсе тапҡыр Бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындары үткәреүе донъя кимәлендә оло шандау, хуплау тыуҙырҙы. Уйындарҙың ойошторолошо, маҡсаты, талаптары, шарттары тураһында һөйләп үтһәгеҙ ине башта...**

**В. Ильясов:** Был фестиваль - бөтөн донъяла йәшәүсе күсмә халыҡтарҙың спорт төрҙәренән, спорт уйындарынан, милли йолаларынан торған ҙур сара, унда 60-тан ашыу ил вәкилдәре ҡатнашты. Был уйындарҙағы һынауҙарға беҙҙең көрәшселәр, мәҫәлән, күп йылдар дауамында әҙерлек үтте, тиергә мөмкин. 1984 йылдан башлап, йыл әйләнәһенә Ҡырғыҙстанда, Үзбәкстанда, Төркмәнстанда, Рәсәйҙең Төньяҡ Кавказ, Татарстан, Башҡортостан республикалары араһында Бөтә Союз көрәш турнирҙары уҙғарыла килде. Ҡырғыҙстанда был турнирҙар гелән Ыҫыҡкүл янында үтә ине. Сара кем биләмәһендә үтһә, шул халыҡтың ҡағиҙәһе буйынса көрәшә инек. Бер-беребеҙҙең көрәш алымдарын өйрәнеп, бөтәбеҙгә лә тап килерлек көрәш концепцияһы төҙөү тураһында хыялландыҡ. Һөҙөмтәлә, бергәләп һөйләшеп-килешеп, бөтә ил халыҡтарын да ҡәнәғәтләндергән көрәш - билбау көрәше ҡағиҙәләре барлыҡҡа килде. Күреп тораһығыҙ, бөгөн был спорт төрҙәре буйынса халыҡ-ара ярыштар, донъя чемпионаты үтә. Көрәш инде 2013 йылда Рәсәйҙең рәсми спорт төрҙәре исемлегенә индерелде. Хәҙер беҙҙең көрәш бөтөн спорт төрҙәре менән бергә халыҡ-ара, Рәсәй, республика беренселегенә ярыштар үткәреүгә мөмкинлек алды. Сараларҙы үткәреүгә БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы тарафынан финанс сығымдары ҡараласаҡ, һәр спорт төрөндәге һымаҡ, спортсыларға разрядтар, спорт дәрәжәләре биреләсәк.

Бөтә донъя күсмә халыҡтары уйындарына беҙҙең милли көрәш индерелмәгәйне. Әммә киләсәктә ул мәсьәләне республика, халыҡ-ара Көрәш федерацияһы етәкселеге ярҙамында хәл итеп булыр, тип уйлайым. Ә әлеге Уйындарҙа ҡаҙаҡ көрәше, ҡырғыҙ көрәше, төркмәндәрҙең гуреше, әзербайжандарҙың гүлеше, төрөктәрҙең аба-көрәше, кавказдарҙың ялыш буйынса ярыштар үткәрелде. Алыш Рәсәйҙә спорт төрө тип иҫәпләнмәй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙ барлыҡ халыҡтарҙың көрәш төрҙәренән тыш, алышта ла ҡатнаштыҡ. Урындағы етәкселек Фестиваль сиктәрендә алыш буйынса донъя чемпионаты үткәрергә ҡарар итте. Беҙҙең ике егет - Артур Зөлҡәрнәев (70 кг-ға тиклемгеләр араһында классик стилдә 2-се урын алды) һәм Исламов (100 кг-ға тиклемге ирекле стиль) Рәсәй йыйылма командаһына инде. Исламов алыштың ҡайһы бер нескәлектәрен өйрәнеп өлгөрмәгәйне, шуға ла был Башҡортостанда лидерҙар иҫәбендә сығыш яһаған, көс буйынса бер кемдән дә ҡалышмаған егетебеҙ беренсе түңәрәктә үк еңелде. Артур иһә уңышлы сығыш яһаны.

Көрәштең ҡалған төрҙәрен беҙҙең егеттәр ҡәҙимге генә өйрәнеп алды. Ҡаҙаҡ көрәшендә - 1-се урын, ҡырғыҙ көрәшендә - 2-се урын беҙҙеке булды. Дөйөм алғанда, беҙҙең иҫәптә - 1 алтын, 4 көмөш, 6 бронза миҙал.

Ә ылаҡ буйынса Башҡортостан командаһы өсөн сығыш яһаусы Баймаҡ егеттәренең Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Ҡытайҙан ҡала 4-се урынға килеп сығыуы бигерәк тә ҡыуаныслы булды. Ә бит был уйынға беҙҙекеләр яңы тотоноп ҡына тора...

**А. Батыршин:** Традицион уҡ атыу йолаһы ла беҙҙә бик әҙ генә кешеләр тырышлығы менән яңынан тергеҙелеп килә. Мин үҙем уның менән өсөнсө ай ғына шөғөлләнәм. Хәрби-тарихи реконструкцияларҙа башҡорт атлылары сүрәтендә сығыш яһаусы "Любизар - Беренсе башҡорт атлы полкы" ойошмаһы уҡ атыу традицияһын тергеҙеү юҫығында ҙур эш алып бара. Ҡырғыҙстан уйындарына барыр өсөн команда быйыл Ғафури районы Имәндәш ауылы эргәһендә үткән "Мәргән уҡсы" фестивале еңеүселәренән тупланды. Традицион уҡ атыу әлегә спорт төрҙәре исемлегенә индерелмәгән, дәүләт тарафынан танылмаған. Шул арҡала беҙ Ҡырғыҙстанға тулы команда булып бара алманыҡ, юл сығымдарын да үҙебеҙ күтәрҙек. Ярыштар өс төрҙә - мәргәнлеккә атыу, алыҫлыҡҡа



атыу, һыбай килеш атыу буйынса үткәрелде. Әлегә һыбай килеш уҡтан атыу тәжрибәбеҙ юҡлыҡтан, беҙ ярыштарҙың төүге ике төрөндә генә ҡатнаштыҡ. Венгр, монгол һәм ҡырғыҙ мәргәндәре һыбай килеш уҡ атыу менән күптән шөғөлләнеп, беҙҙән айырмалы рәүештә төрлө донъя ярыштарында ҡатнашалар. Алыҫлыҡҡа атҡан уҡтары ла үҙенсәлекле - нәҙегерәк булыуы менән айырыла. Минең уғым 200 метрға осһа, венгрҙыҡы - 400 метрға тиклем барып етә. Әлбиттә, айырма ҙур. Мәҫәлән был күнекмәлә еңеүсе словак Богар Петер Ҡытайҙа үткән ярышта хатта уғын 500 метрҙан алыҫыраҡ ебәргән. Беҙ ҡатнашҡан күнекмәлә иһә 40 метрҙан сәпкә төбәп аттыҡ. Беренсе турҙан һуң иң күп мәрәй йыйыусылар артабан финалға үтте. Ҡыҙғанысҡа күрә, беҙҙең финалға үтергә мәрәйҙәребеҙ етмәне.

Нисек кенә булмаһын, Уйындарҙа ҡатнашыу арыу ғына тәжрибә мәктәбе булды. Дөйөм алғанда, беҙҙең маҡсатыбыҙ аралашыу, төрлө илдәрҙән килгән традицион уҡ атыусылар менән танышыу ине. Улар менән тәжрибә уртаҡлашыу. Уҡ атыуҙың да төрлө стилдәрен күрҙек. Беҙ баш бармаҡҡа махсус балдаҡ кейеп, төркисә атһаҡ, күптәр өс бармаҡ менән Урта диңгеҙ буйы атыу стилен ҡулланалар. Тағы ла шуныһы: киләсәктә ошондай ярыштарға барғанда бында танышҡан шул бер үк спортсылар йыйылған буласаҡ. Һин кемдең кем икәнен, уның нимәгә һәләтле икәнен белеп торасаҡһың. Уларға ҡарап, беҙҙең дә атыу һәләте камиллашасаҡ. Алла бирһә, ике йылдан үтәсәк "Бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындары"на тағы барасаҡбыҙ. Аҙмы-күпме тәжрибә туплап ҡайттыҡ. Уҡ атыу оҫталығы бер-ике айҙа ғына формалаша алмай, йылдар буйы шөғөлләнеү генә ниндәйҙер һөҙөмтәләргә алып килә.

▸ **Вәкил Исҡәндәр улы, һеҙ донъя кимәлендәге сараларға күп йөрөгәнһегеҙ, көрәш майҙанында өс тиҫтә йыл буйы бил бирмәгәнһегеҙ. Ҡырғыҙстан был Уйындарҙы үткәреүгә нисегерәк әҙерләнгән? Уларҙың ойоштороу кимәленән үҙегеҙгә ниндәйерәк һығымталар яһай йөрөнөгөҙ?**

**В. Ильясов:** Ойоштороу юғары кимәлдә булды. Спорт майҙансыҡтары бик ентекләп әҙерләнгән. Халыҡ, көйәрмәндәр бик күпләп йыйылған, етәкселәр ҡулынан килгәндең бөтәһен дә эшләргә тырышҡан. Көс һынашыусыларға бүләк фонды ла бик һәйбәт ойошторолоған - һығымтаны бүләк фонды муллығынан сығып та яһарға була. Тамашасыларҙың, ҡатнашыусыларҙың хәүефһеҙлеге тәьмин ителгән. Тамаҡ ялғауға, ял итеүгә бөтөн шарттар булдырылған. Ҡатнашыусыларҙың барыһы ла Ыҫыҡкүл буйындағы шифаханаға урынлаштырылды, уларға көнөнә 3 тапҡыр бушлай ашатыу ойошторолдо. Әлбиттә, бөтә ерҙә лә ойоштороусылар бындай йомартлыҡ күрәһәтә һалып бармай ул...

**А. Батыршин:** Ирекмәндәр тураһында ла әйтеп китергә кәрәк. Аэропортҡа килеп төшөү менән беҙҙе ирекмәндәр уратып алып, һуңғы көнөнә тиклем оҙатып йөрөнөләр. Ниндәй генә һорау булмаһын, ниндәй генә телдә мөрәжәғәт итһәк тә, арала төрлө илдәрҙән ҡатнашыусылар бар ине, ирекмәндәр ярҙам итергә әҙер генә торҙо.

**В. Ильясов:** Тағы бер күҙгә ташланған үҙенсәлек, тип, шуны әйтергә кәрәк: Уйындар 9 көн буйы барҙы, тамашасы залдарында бөтөн урындар ҙа халыҡ менән шығырым тулы булды. Бәйгелә лә, көрәштә лә... Халыҡ дәррәү килгәйне сараларға. Бигерәк тә ҡырғыҙҙар-







✓ ***Бер ниндәй финанс ярҙамы булмаһа ла, әлеге Уйындарға атлығып барҙыҡ. Был беҙгә кәрәк инеме? Беҙ унда нимә эҙләп барҙыҡ? Бүләктәргә өмөт итмәнек. Мине нимә әйҙәне? Белмәйем. Бәлки, ҡан саҡырыуы булғандыр ул...***



ҙың үҙ спортсыларын матур итеп дәртләндереүе оҡшаны. Мәҫәлән, майҙанға ҡырғыҙ көрәшсеһе сығып, битен һыпырып, "Аллаһу әкбәр" тип өндәшеүе була, залда ултырыусы ҡырғыҙҙар ҙа дәррәү генә итеп биттәрен һыпырып, барыһы бергә "Амин!" тип ҡуя. Алдан әҙерләнгәндәр, тиерһең. Иҫ киткес ойошҡанлылыҡ!

**А.Батыршин:** Бөтә донъя күсмә халыҡтары уйындары Ҡырғыҙстан өсөн үҙенсәлекле "визит карточкаһы" булып тора. Ошо Уйындары менән улар бөтөн донъяла билдәлелек яуларға, шулай уҡ туристарҙы күберәк йәлеп итергә теләйҙәр. Шуның өсөн дә бик ныҡ әҙерләнгәндәр, приз фондтарына ла аҡса йәлләмәгәндәр.

Беҙ Ысыҡкүл буйындағы пансионатта йәшәнек. Ярыштар төрлө ерҙә, уҡ атыу буйынса ярыштар, мәҫәлән, "Ҡырсын" тип аталған уйһыулыҡта үткәрелде. Бөтә яҡтан тауҙар менән уратып алынған урында 500-ләгән кейеҙ тирмәләр ҡоролған ҙур ауылды бер аҙна эсендә йыйғандар. Тирмәләр эргәһендә ҡаҙан аҫылған, ашһыу еҫе танауҙарҙы ҡытыҡлай. Шунда уҡ ҡул эштәре һатыу баҙары ойоштороп ебәргәндәр.

# УҠ АТЫУ, ЫЛАҠ...

**йыйҙы ҡунаҡ**

Бәләкәй генә майҙансыҡтарында ҡырғыҙ халыҡ сәнғәтен - бейеү-йырҙарын күрергә була ине. Тормош ҡайнап тора. 200 йылға боронғоға ҡайтҡандай тояһың үҙеңде. Уҡсылар, бөркөт сөйөүселәр, эттәрҙе һөсләтеп һунар итеүселәр, башҡа бәйгеселәр күнекмәләре үтә. Бөтәһе лә милли кейемдә. Беҙ ҙә үҙебеҙҙең башҡорт милли кейемендә йөрөнөк. Беренсе ике көндә кейемебеҙгә ҡарап, кем икәнебеҙҙе аңлап етмәһәләр, аҙаҡ барыһы ла беҙҙең башҡорт икәнебеҙҙе танып бөткәйне. Ололар башҡорттарҙың ҡырғыҙ халҡына ҡәрҙәш, туғандаш, оҡшаш телле булыуы тураһында һөйләй. Башҡорттар бик боронғо халыҡ бит ул, тип тә әйтеп ҡуялар. Юлай ағай Ғәлиуллин Бородинолағы хәрби-тарихи реконструкцияларға ла күп йөрөгән кеше булараҡ, бүтән төрки халыҡтар араһында башҡорт кейеменең, ҡоралдарының, хәрби тарихының ниндәй даны барлығын яҡшы белә. Уның кәңәше менән күнекмәләрҙән башҡа ла, былай йөрөгәндә лә милли кейемдә булдыҡ. Аҙаҡҡы көндәрҙә йәйләүҙәгеләр алыҫтан уҡ: "О, башҡорттар килә, башҡорттар!" - тип ҡысҡырыша инеләр.

**▶ Һеҙ әле ҡырғыҙҙарҙың әүҙемлеге тураһында телгә алдығыҙ. Беҙҙең халыҡты ла әүҙем түгел тип әйтеп булмай, әлбиттә, хоккей матчтары барышында "Салауат Юлаев" командаһы көйәрмәндәре ана ҡалай дәррәү күтәрелә. Шулай ҙа ҡырғыҙҙарҙағы һымаҡ әүҙемлекте, йәғни үҙ тарихың, йолаларың менән ҡыҙыҡһыныуҙы нисегерәк уятып ебәреп була, тип уйлайһығыҙ?**

**В. Ильясов:** Был халыҡтың әүҙемлеге йолаларынан килә. Ҡырғыҙҙарҙа, үзбәктәрҙә, ҡаҙаҡтарҙа бер байрам да - туйҙар ҙа, бала тыуыуы ла, сөннәткә ултыртыу ҙа, башҡалары ла - береһе лә бәйгенән, көрәштән башҡа үтмәй. Ул ярыштарҙа еңеүселәргә затлы бүләктәр бирелә, улар йәмғиәттә айырым урын биләп тора, балалар бәләкәйҙән ошоларҙы күреп үҫә, ошо йүнәлештә тәрбиә ала. Беҙҙә лә ундай йолалар бар, ләкин үтәлмәй. Ҡырғыҙҙарҙың Уйындарға күпләп килеүенең сәбәбе шулдыр, тип уйланыла. Беҙгә иһә, ул халыҡтарҙағы тәжрибәне өйрәнергә, үҙебеҙсә һығымталар яһарға, үҙебеҙҙең йолаларҙы тергеҙеүгә тотонорға, тамашаларҙы сағыу итеү юлдарын эҙләргә кәрәктер, тигән фекерҙәмен.



**А. Батыршин:** Йәштәрҙә йолаларға, шул уҡ көрәшкә лә ҡыҙыҡһыныу уятырға була ул. Бына мин, мәҫәлән, Юлай Ғәлиуллин ағайҙарҙың эшмәкәрлеген күреп йөрөһәм дә, традицион уҡ атыу тураһында 1 йыл элек бер ни ҙә белмәй инем. Миндә бер ниндәй ҙә ҡыҙыҡһыныу булманы. Ҡышын Юлай ағайҙар менән танышып, аралашып, кейемен, ҡылысын - ҡоралдарын ҡарап ҡына, ҡыҙыҡһынып киттем. Аҙаҡ: "Янды, уҡты ҡайҙан алырға була?" - тип Юлай ағайҙың башын ҡаңғырта башланым. Ә инде янды үҙ ҡулыма алып, унан уҡ атып ҡарағандан һуң, артабан ныҡлап ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килде. Йәмле, хозур Бөрйән ҡаяһына менеп, яндың керешен тартып фотоға төшкәйнем. Шул фотоны күреп, интернет селтәрендә генә күпме ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килде. Шулай итеп, бөтәһен дә ҡыҙыҡһындырған яҡшы бер күренеш барлыҡҡа килә бара. Бер балалар лагерында булғанымда балаларҙың ҡулына уҡ-һаҙағымды тоттороп ҡараттым. Ул балаларҙың күҙҙәренең нисек баҙлап китеүен күрһәгеҙ икән! Улар үҙҙәрен кәм тигәндә әкиәт батырылай хис иткәндер! Оҫталыҡ дәресе рәүешендә бер уҡты сәпкә атып күрһәткәндән һуң, балалар үҙ аллы аттылар. Һәм был ҡыҙыҡһыныу уларҙың кеменеңдер күңеленә мәңгелеккә инеп урынлашты, тип ышанам. Уҡ атыу һәләте ҡандалыр беҙҙең. Шуның өсөн, йолаларыбыҙҙы күрһәтә торған күрһәтмә, йә булмаһа шоу ойоштора белергә кәрәк. Хәрби-тарихи реконструкция нимә ул? Ул - шулай уҡ күрһәтмә сығыш, хәҙерге тел менән әйткәндә, шоу. Шул шоуҙы ҡараған һәр береһенең уҡ атыу, милли кейем тегеү, атта йөрөү менән мауығыуҙары барлыҡҡа килеүенә шикләнмәйем.

Эйе, уҡ атыусының үҙенең махсус милли кейеме булырға тейеш. Бәйгегә әҙерләнгән һәр ҡатнашыусы кейемде үҙе тегә. "Мәргән уҡсы" фестиваленә әҙерләнгәндә мин боронғо башҡорт кейемдәре тураһында мәғлүмәт эҙләп, әллә күпме тарихи китаптарға, ғалимдарҙың, этнографтарҙың яҙмаларына мөрәжәғәт иттем. Соҡсондом, эҙләндем, ошо темаға башкөллө сумдым. Кейем нисек тегеләргә тейешлеген белмәүем, шулай уҡ белергә теләүем арҡаһында ғәйәт ҙур ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килде. Күңелгә яткан, күңелде арбаған ҡыҙыҡһыныу. Булмышың яуап эҙләгән һорауҙар сылбырын тағатып бөтмәйенсә тороп, тынысланып булмай бындай саҡта. Эҙләнеүҙәремде әле лә туҡтатҡаным юҡ. Әгәр һинең етди бер ниәтең бар икән, шул ниәтеңә ныҡлап йәбешергә тейешһең. Ихласлап тотон, уңыштарыңды, уңышһыҙлыҡтарыңды йәшермә. Шул саҡта һинең шөғөлөң менән ҡыҙыҡһынған, артыңдан эйәреп йөрөгән башҡа кешеләр барлыҡҡа килер. Йәштәрҙе милли көрәшкә ылыҡтырыр өсөн дә, бәлки, уйын формаһындағы берәй батырҙар шоуы кәрәктер? Уйын формаһында тәҡдим ителгән саралар тамашасыға ла ҡыҙыҡ...

**В.Ильясов:** Килешәм. Беҙ ҙә үҙебеҙҙең сараларҙы уйын, шоу формаһында үткәрә башланыҡ тип әйтергә була. Былтыр Өфө ҡалаһы округы хакимиәте башлығы беренселегенә "Динамо" стадионында көрәш буйынса тамаша формаһындағы ярыштар үтте. Минең уйымса, был формалағы ярыштарҙы халыҡ та бик оҡшатты. Был тәжрибәне артабан да файҙаланырға тигән иҫәбебеҙ бар.



**А.Батыршин:** Ә беҙ, 4 уҡсы, бер ниндәй финанс ярҙамы булмаһа ла, әлеге Уйындарға атлығып барҙыҡ. Был беҙгә кәрәк инеме? Беҙ унда нимә эҙләп барҙыҡ? Бүләктәргә өмөт итмәнек. Мин хатта финалға үтә алмаясағымды алдан уҡ белә инем. Сөнки 20-шәр йыл күнекмә үткән венгрҙар, словактарҙы ҡыуып етә алмаҫымды белә инем. Шулай ҙа минең барыбер ул Уйындарға барғым килде. Мине нимә әйҙәне? Белмәйем. Бәлки, ҡан саҡырыуы булғандыр ул...



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һүҙҙең аҙағында бер генә хәл тураһында әйтеп үтке килә. Ошо Уйындарҙы яҡтыртҡан бер Үҙәк телевидениеһы хәбәрсеһе, һүҙен йомғаҡлап: "Һәр хәлдә, беҙ барыбыҙ ҙа ҡасандыр күсмә халыҡ булғанбыҙ инде ул", - тигәйне. Бына бит, Ысыҡкүл буйындағы рух кешегә нисек тәъҫир итә, үҙенең тамырҙарын барлата, үҙенә ылыҡтыра, тип уйланылғайны шунда. Был уйындарҙы үткәреп, ҡырғыҙҙар үҙҙәренең рух көсөн күрһәткән икән, ошо көскә һыйыныусылар ҙа табылған. Эльбрус Ниғмәтуллин да был турала бер саҡ: "Көслө кешеләргә һыйыналар", - тип әйткәйне. Ғүмерҙәре буйы ултыраҡ тормош алып барған мәҙәниәт вәкилдәре лә "күсмә халыҡ" булырға тырыша икән, был әлеге Уйындарҙы ойоштороуҙың юғары кимәле, исем өсөн үткәрелмәүе хаҡында һөйләй...**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

***✓ Ябайлыҡты, ихласлыҡты төшөнөүе еңел. Ошо мәлдә нимә эшләгем килгәнде әйтәйемме? Ҡырға сығып, төтөндә күҙҙәрҙе әсеттереп, усаҡ көлөнә картуф күмеп ашағым килә.***



# САҠЫР МИНЕ ЗӘҢГӘР КИҢЛЕКТӘРГӘ...

Хәйҙәр ТАПАҠОВ

(Повестан өҙөк)

Иртәгеһен төштән һуң Андрей Диденко кабинетыма башын тыҡты:

- Слушай, коллега, яңы ғына Слуквин шылтыратты, һиңә кисекмәҫтән штабҡа килеп етергә бойорҙо.

- Күрәһең бит ауырыуҙарҙы ҡабул итәм, иптәш өлкән сержант.

- Азамат Баймөхәмәтов, төшөнмәһәң, төшөндөрәм, Слуквин келәмгә саҡыра, тим. Мәктәп командирының политбүлек буйынса урынбаҫары, взвод, йәиһә рота командиры түгел! Приемда әлегә үҙем ултырып торормон, уныһы өсөн борсолма!

- Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бында ветлечебница түгел.

- Старшина, тағы әрләшергәме, яғалашырғамы яйың? Улай уҡ кенәсел булма, ну, әләгештек, икебеҙҙә лә ғәйеп бар, давай онотайыҡ. Беҙгә бит ары ла бергә йәшәргә, бергә эшләргә! - Эргәмә килеп ярашыу билдәһе итеп ҡулын һондо. Мин дә ҡаршылашмай, киреләнмәй, имән ботағылай ҡаты, суғырмаҡлы бармаҡтарҙы усыма ҡыҫтым.

Штабтың беренсе ҡатындағы дежурныйға замполитҡа саҡырылыуымды әйткәйнем, ул тура телефондан шылтыратып белешкәс, эскә үткәрҙе. Йыл ярым самаһы хеҙмәт итһәм дә бында тәүләп инеүем, шуға үҙемде бөтөнләй икенсе донъяға килеп юлыҡҡандай хис иттем. Өсөнсө ҡаттағы фойегә тартым асыҡлыҡҡа ҡара күн диван, ике ҡәнәфи, оргбыяланан эшләнгән журнал өҫтәле ҡуйылған, тәҙрә ҡырҙарында ағас олонло, остары түшәмгә терәлгән экзотик гөлдәр, уртала ебәк елпеүесле ҡыҙғылт тәңкәле балыҡтар йөҙгән, яһалма ылымыҡтар, төҫлө ҡырсынташтар менән биҙәлгән ҙур аквариум, уң һәм һул стеналарға Бородино алышын, Ҡырым һуғышы осоронда Севастополде һаҡлаусыларҙың героик оборонаһын һынландырған киң панорамалы картиналарҙы берекеткәндәр, ике яҡҡа киткән иркен коридорҙың буйынан-буйына тар яҫылыҡтағы аҫыл келәм түшәлгән, итек табандары аша тығыҙ йомшаҡлыҡты тойҙом хатта. Картиналарға яндаш итеп урынлаштырылған дәү көҙгөләр тотош фойены масштаблыраҡ, киңерәк итеп сағылдыралар. Көҙгөлә күренгән һынымды дәртләндерергә, тынысландырырға теләп, күҙ ҡыҫтым, бирешмә, йәнәһе. Дежурныйҙың өйрәтеүе буйынса, уңға ҡайырылдым. Бында ла береһе икенсеһенән алыҫ уҡ урынлашҡан ишектәр араһына бөйөк рус полководецтарының майлы буяу менән эшләнгән портреттарын теҙеп элгәндәр, әйтерһең, алдыңа тарих, илдең үткәне сафҡа баҫҡан. Штабтың дизайнында һөнәри нескәлек һәм шул уҡ ваҡытта хәрби рух сағыла. Ишектәге ялтыр ҡалайҙағы яҙыуға күҙ һалдым. Слуквиндың кабинеты полковник Жирновтың йәнәшәһендә икән. Бәхеткә күрә, үтеп-һүтеп йөрөүселәр күренмәй. Себен осҡаны ла ишетелмәгән, киноларҙа күргән батша һарайҙарындағы кеүек һипһендергес, серле патриархаль тынлыҡта ҡолаҡтар тонғандай. Ишек тотҡаһына үрелер алдынан гимнастеркамды һыпырып тигеҙләп, бил ҡайышын тарттым, былай ҙа башымда килешле ятҡан пилоткамды төҙәтә биреп ҡуйҙым.

- Иптәш майор, инергә рөхсәт итегеҙ?

Слуквин алдында таралып ятҡан ҡағыҙҙарынан айырылып, башын ҡалҡытты:

- Ә-ә-ә, доктор, ин, давай!

Һынымды тура тотоп, хәрбиҙәрсә көр тауыш менән рапорт бирҙем:

- Иптәш майор, старшина Баймөхәмәтов һеҙҙең бойороғоғоҙ буйынса килде!

- Вольно, старшина. Күреп тораһың бит, мин майор түгел, подполковник.

Алабарманлығыма барып, тейешлекте, кәрәклекте үтәп булһа ла погондарға күҙ һалмағанмын:

- Иғтибарһыҙлығымды ғәфү итегеҙ, иптәш подполковник.

- Зарар юҡ.

- Звание алыуығыҙ менән ҡотларға рөхсәт итегеҙ, иптәш подполковник.

- Рәхмәт. Һин нимә өҙлөкһөҙ бер үк һүҙҙәрҙе тылҡыйһың әле, иптәш... старшина? - Кабинет хужаһы шелтәләгәндәй итеп ҡараны. - Бына бынауында ултыр. - Янынан урын күрһәтте.

Түргә үтеү ҡайҙа, баҙнатһыҙ ғына стена ҡырлатып теҙелгән ултырғыстарҙың ситкеһенә һаҡтым.

Кабинет бай йыһазландырылған: уртала ҡыҙыл ағастан эшләнгән "т" хәрефе рәүешендәге ауыр өҫтәл, тәҙрәһеҙ стена ҡырында быяла ҡапҡаслы дәү шкаф, унда революция юлбашсыһы китаптарының тулы йыйылмаһы тупланған. Тәҙрәләрҙә ситтәре суҡ ептәр менән ҡайылған бәрхәт ҡорғандар, түрҙә Леонид Ильич Брежневтың орден-миҙалдарын тағып хәрби формала төшкән төҫлө фотопортреты. Иҙәндәге шыршы энәләре һымаҡ итеп семәрләп түшәгән имән паркет көрән төҫтәге үтә күренмәле ялтыр лак менән ҡатырылғанғамылыр, һаран яҡтылыҡ һарҡҡан кабинет ҡараңғы һымаҡ. Шул эңер төҫө яҫы ҡара ҡашлы генераль секретарҙың ҡырыҫ ҡарашын, шкафтағы асып уҡып ҡаралмаған ҡалын, ауыр томдарҙың тослоған шомландырып күрһәтеп, тәнде лә, йәнде лә баҫа төҫлө.

- Хәлдәрең нисек, Баймөхәмәтов? - Слуквин кнопкаға баҫып, эргәһендәге өҫтәл лампаһын һүндерҙе.

- Яҡшы, иптәш подполковник.

- Устав ҡағиҙәләрен аҙға ғына онотоп тор, тинем түгелме, юғиһә, беҙҙең һөйләшеү килеп сыҡмаҫ. Яңылышмаһам, исемең Азамат шикелле, ә, старшина?

- Так точно, иптәш... Эйе, Павел Сергеевич...

Подполковниктың юғарынан түбәнгә ташлаған һынаулы һирпелеүе, бының менән әңгәмә ҡороу кәрәкме һәм урынлымы, тигәндәй күренде миңә, шуға теләһә ниндәй мәлдә сығып китергә әҙерлегемде белдереп, һынымды турайта биреп ҡуйҙым.

- Тайырға самалайһыңмы? Өлгөрөрһөң. Тағы званием, йәшем буйынса өлкәнмен бит, шуға һин дә мин яҡын итеп өндәшеүемә сәйерһенмә.

- Былдай урында мин икенсе генә тапҡыр. Партияға ингәндә бюро ағзалары йыйылған райкомдың беренсе секретары кабинетында булырға тура килгәйне, тик ул былай уҡ шәп түгел ине.

- Ә-ә-ә, быларҙы әйтәһеңме? - Кабинет хужаһы ҡулын йәйеп, кабинет ҡаралтыларына күрһәтте. - Подполковник Фединдан ҡалған ҡомартҡы. Ул гражданкала һөнәре буйынса биҙәүсе архитектор булған, шуға тотош штабты ҡыландырған үҙенсә. Миңә ҡалһа, саманан ашҡан интерьерҙы, яһалма бутафорияны яратмайым. Тышҡы ялтырауыҡ ҡына бит улар.

Тәбәнәк буйлы тәгәрәгән туптай йүгермәләп йөрөгән замполит Фединды яҡшы хәтерләйем. Беҙҙең яҙғы саҡырылыш килгәс оҙаҡ та тормай ул ҡайҙалыр китте, үрләтеп, округҡа, штабҡа алғандар, йәнәһе лә, тип һөйләнеләр аҙаҡ. Слуквиндар тәүге аҙнала уҡ парлашып клубта күренделәр. Шул саҡта Янаны күктән төшкән илаһи фәрештәләй ҡабул иткәйнем...

Уйымды замполиттың әңгәмәне ялғауы бүлдерҙе:

- Һеҙҙе партияға сағыштырмаса иртә ҡабул иткәндәр. Миңә ҡалһа, политакадемияла уҡып йөрөһәм дә утыҙға етеп килгәндә генә партбилет алдым. Тегендә энәһенән ебенә ҡәҙәр тикшергәндән һуң ғына башта кандидат итеп, шунан ышаныстарын аҡлаған осраҡта ике йылдан һуң ағзалыҡҡа ҡабул итәләр ине. Төпсөнә был, тимә, һиңә нисә йәш әле?

- Егерме өс тула.

- Яңы йәшәй генә башлағанһың, киләсәктә әллә ниндәй затлы һарайҙарҙың ишектәрен асырға тура килер әле. Үҙемә ҡалһа, рәсмилекте ҡабул итеп бөтмәйем. Ябайлыҡты, ихласлыҡты төшөнөүе еңел. Ошо мәлдә нимә эшләгем килгәнде әйтәйемме? Ҡырға сығып, төтөндә күҙҙәрҙе әсеттереп, усаҡ көлөнә картуф күмеп ашағым килә. Ҡайнар, тышы һарғайып ҡатҡан тәмле ризыҡты устарында бейетеп, үҙенсәлекле хуш еҫкә иҫерген киләме, Азамат? Хәтәр шәп бит, ә! - Ирәмһеп китте, һүрәтләгән ризығына үрелергә йыйынғандай, устарын ыуып алды. Һиҙәм, был лирик сигенеү генә, тәжрибәле партия функционеры мине етди әңгәмәгә әҙерләй. Яңылышманым, бер аҙҙан ирәмһегән йөҙҙө киренән битарафлыҡ битлеге япты, замполит команда биргәндәгеләй һораны:

- Бында ни өсөн саҡыртҡанымды беләһеңме?

- Һуңғы арала хужалыҡ взводында аҙна һайын үткәрелгән политуҡыуҙарға йөрөмәй башланым. Бәлки, шуғалыр.

- Ни сәбәптән уларҙы ҡалдыраһың?

- Ауырыуҙар күп. Иртәнән алып кискә саҡлы приемда. Тағы санчаста дауаланып ятыусылар етерлек. Яңы пополнение урындағы климатҡа өйрәнеп киткәнсе гел шулай була.

- Улай уҡ эшлекле булып китмә. Ә бына политуҡыуҙарҙы ҡалдырырға ярамай. Тиҙҙән тотош округта күптән планға алынған, әле уға етди әҙерлек барған учениеның башланып китеүе бик тә ихтимал. Унда бит хәрби әҙерлектән тыш, һалдаттарҙың сәйәси аң-белем кимәлен дә тикшерәсәктәр. Билдәле булыуынса, сержант мәктәбе Балтик буйында бөтә йәһәттән дә иң яҡшылар иҫәбендә. Шул кимәлдән төшөргә ярамай. Беҙҙең алға бына ошондай бурыс ҡуйылған.

- Ғәйеплемен, башҡаса ҡабатланмаҫ!

- Ғәйеплемен, ғәйеплемен... Ғәйебенде таный белеү, уны төҙәтергә ынтылыу ҙа үҙенә күрә аҡыл.

"Әллә теге парктағы осрашыуҙы ҡырҡҡа тәкмәстереп еткергәндәрме быға?.."

- Һеҙҙе дәресте ҡалдырған өсөн генә саҡыртманым. Әйткәндәй, партия директиваларын, съезд материалдарын уҡып ҡына белемле, зиһенле булып булмай. Тормоштоң яҙылмаған закондары икенсерәк, бик йыш уйламағаныраҡ яҡтан килтереп бәрә.

"Ысынлап та саҡырыу Янаға бәйлелер?.."

- Һеҙ минең ҡатыным менән таныштар бит әле?

"Бына нисек! Дөрөҫ һиҙемләгәнмен..."

- Ҡайһылыр кимәлдә. Ул санчаста ҡабул итеүгә һеҙҙең менән килгәйне, шунан беләм. Бәлки, беләм, тип әйтеүе артығыраҡтыр ҙа.

- Ҡайһы саҡ кеше менән оҙаҡ йылдар бергә йәшәп, аралашып та уның хаҡында бер ни ҙә белмәҫкә мөмкин, һәм - киреһенсә... - Подполковник башлағанын әйтеп бөтөрмәй ирендәрен ҡымтыны ла билдәһеҙлеккә төбәлеп, тынып ҡалды. Әле генә ныҡлап иғтибар иттем: насар ҡырылған дүрткел эйәкле, тулы битле йөҙө тартылып киткән, әллә аҡҡа ҡарап оҙаҡ эшләүҙән, әллә йоҡоһоҙлоҡтан, күҙҙәре ҡыҙарған, гел килешле итеп тарап йөрөткән сал сәстәре лә таралып өтөрәйеңкерәп күренә. - Һине бында шуның өсөн саҡырттым... - Әйтерен онотҡандай, бер килке шымтайғас, өҫтәлде төйөргә йомған йоҙроғоның һыртын ыуып, ҡыҫылған тештәре араһынан ыңғырашыуға тартым һүҙҙәрен һыҡты. - Мәктәптә меңгә яҡын кеше, ә бына һөйләшерлек, эс серенде сисерлек бер кем юҡ. Аңлайһыңмы - бер кем дә!

- Дуҫтарығыҙ...

- Дуҫтар! - Слуквин башлағанымды асыулы бүлдерҙе. - Ҡасан политработниктың дуҫтары булғанын күргәнең бар? - Минең дуҫтарым Маркс, Энгельс, Ленин һәм наградаларға туймаҫ бына бынау! - Башы осондағы Брежневтың портретына ымланы.

- Иғтибарлы тыңлаусы, тапҡыр кәңәшсе кимәлендә һеҙҙең менән әңгәмә ҡора алмамдыр. Һеҙ - офицер, мин - сержант составынан. Теләйемме быны, әллә юҡмы, званиеларҙың айырмаһына ярашлы субординация һаҡларға мәжбүрмен.

- Ни бысағыма ул звание, әле һин әйткән субординация? Часта политтәрбиә эштәре юғары кимәлдә ҡуйылғанлыҡты иҫәпкә алып, партия съезы алдынан яурындарыма сираттан тыш тағы ла бер йондоҙҙо өҫтәнеләр. Ошонан аҙаҡ нимә булһа ла үҙгәрҙеме, йә үҙгәрерме?

- Артмағында генерал погондарын йөрөтмәгән һалдат насар һалдат, тигән Александр Суворов.

**(Дауамы бар).**

ЗАУЫҠ



# ШАҒИРҘАРҘЫҢ ЙӘНЕН ҠЫРҠҠА БӨГӨП,

## Тетеп-тунап тыуа шиғырҙар

*Ғәлиә ФӘЙЗУЛЛИНА*

### Тантана

Күңел байрам һорай. Бер өйрәнгәс,
Ниәтем юҡ унан йөшенер.
Ҡәләм-ҡағыҙ алып, төнгә керәм,
Яҙалмаһам, Ғәләм ишелер!..

О, ул ғазап! Татыр өсөн шуны
Төндә көтә күпме шағирҙар.
Шағирҙарҙың йәнен ҡырҡҡа бөгөп,
Тетеп-тунап тыуа шиғырҙар.

Күңел шунан ләззәт таба бына,
Күңел шунан таба тантана!
Бер осонан, ҡәләм, бал тама ла,
Бер осонан, иһә, ҡан тама.

Уяттыммы, Шағир? Йөрәгеңдең
Тынын тоям ошо һүҙҙәрҙә.
Ҡыйыр-ҡыймаҫ, ҡоштар һүҙ башланы,
Ысыҡ ҡатыш ҡояш - күҙҙәрҙә...

Таңда күргән төшмө? Һаташыумы?
Һағыммы был? Байрам? Тантана?
Ҡәләмеңдән, шағир, аһ, бал түгел,
Тантаналар өсөн... ҡан тама.

### Еләк тәме

Ялан ҡыҙ(ы)рып йөрөп киләйемсе,
Йәйҙең йәмен һөҙөп киләйем.
Еләк еҫтәренән иҫерәйем,
Иҫереүҙең серен беләйем.

Еләк тәме ҡайтһын иренемдә,
Тәндәрендә ҡаның уйнатыр.
Һиҫкәнептәр генә киттең әллә,
Аһ, йәй тәме - уйҙар уйлатыр...

Көнләшерлекме ни әле тәмем,
Еләк кеүек саҡтар -төш кенә.
Ярай әле йәнем асылдары
Ҡаның уйнатырға эшкинә.

Ялан ҡыҙ(ы)рып йөрөп киләйексе,
Еләк тәмдәренән иҫереп.
Бешкән еләк кеүек саҡтарымдың
Йәм-тәмдәрен йәнә кисереп.

### Үҙең һаҡла, Раббым!

Йәйҙәрҙән дә күпте көтмәйем мин,
Төпһеҙ хыялдарҙан өмөт өҙҙөм.
Офоҡтарҙа шәфәк балҡығанда,
Күләгәһен күрәм инде көҙҙөң.

Энер юллап байып барған ҡояш,
Әүрәтергә уйлап, әйҙәйҙер ҙә...
Ҡәҙерлерәк ҡояш сығыштары
Төнө ымһындырмай был йәйҙәрҙең...

Төнө ымһындырмай был йәйҙәрҙең...
Ҡояш сығыштары ҡәҙерлерәк.
Ә шулай ҙа, ҡояш байышына,
Үҙем торайым, тим, әҙерерәк...

Киске шәфәк, йәнде иретә лә,
Донъяларҙы, хатта, оноттора.
Шәфәктәрҙә, тән йәменән биг(е)рәк,
Йәндәр теүәллеге ылыҡтыра.

Ҡояш ише генә булып байып,
Оҙата алһам ине донъяларҙы.
Балаларым - йәнем тыныслығы,
Улар ҡорор ҡәлгә-оялар3ы

Һаҡла инде, Раббым, ел-зәхмәттән,
Балаларҙың һин Ҡояшын һаҡла.
Һәм төштәрен һаҡла, йәнкәйҙәре
Бөтөн генә булһын, Раббым, яҡла.
Донъялары имен генә булһын,
Яҙ-йәйҙәрен, көҙ-ҡыштарын һаҡла.
Ҡанаттарын һаҡла,теүәл булһын,
Үҙең һаҡла, Раббым, үҙең яҡла.

Ҡиблаларын һаҡла, алһыу ғына
Булһын ине, берүк, шәфәҡтәре.
Көмбәҙ булһын хыял күктәрендә
Аяуҙарың менән шәфҡәттәрең
Үҙең һаҡла, Раббым, үҙең яҡла.

### Йырлы сағым

Күңелемдең йырлы сағы,
Моңло сағы.
Айлы сағы, Көнлө сағы,
Нурлы сағы.

Өйөмдөң дә ошо мәлгә
Мохтаж сағы.
Хыялдарҙың сөм күктәргә
Ашҡан сағы.

Был мәл - йөрәк мөхәббәткә
Төрөнгән саҡ.
Йырлап торған йөрәк үҙе -
Йырлы ҡосаҡ.

Шул ҡосаҡта ирей һүҙем -
Моң ярала.
Ошо мәлде хыянаттан
Йән, арала.

Күңелдәрем, Айым, Көнөм
Тулышҡан саҡ.
Йырлы сағым булһын һәр саҡ
Изге усаҡ.

### Бөгөнгөмә рәхмәт

Бөгөнөмә рәхмәт. Хыялымда
Һинең менән йәнә ҡауыштым.
Баш осонда йондоҙ балҡып торҙо
Һөйөү тулы беҙҙең ҡыуыштың.

Бөгөнөмә рәхмәт. Хәтеремдең
Уятты бит наҙлы ҡуҙҙарын.
Өшөй-өшөй аҡтарғыһы килмәй,
Йәнгә ҡуша ҡатҡан боҙҙарын.

Һин, йондоҙҙо үр(е)леп кенә алып,
Устарыма һалдың - йылытты.
Һиңә һыйынғанмын, эҫенгәнмен,
Эй, оҡшаттың ошо ҡылыҡты.

Иркәләнәм, имеш... Бармаҡтарың
Иҫһеҙләтә. Сәсем таралған.
Теге йондоҙ - йәнә баш осонда,
Һөйөү уты булып яралған.

Бөгөнөмә рәхмәт. Ҡыуышымды
Һүтмәй торам әле - йылытты.
Онотторҙо, хан һарайындағы
Быйыл ҡыш үткәргән һыуыҡты.

### Асылдар

Имләйем, тип бар донъяны,
Яуа ямғыр.
Минең күңелем дә бер мәл
Дауа табыр.

Ерҙән өйрәнәйем, ул бит
Шундай сабыр.
Сабырлыҡҡа доға ҡылып,
Ҡоя ямғыр.

Ерҙән өйрәнәйем, ул бит
Шундай тыныс.
Артҡа сигенде, баш эйеп,
Йәшен - ҡылыс.

Ерҙән өйрәнәйем, ул бит
Әй ҡөҙрәтле!.
Күк шуға, Ер алдарында,
Мең рәхмәтле.

Ерҙең асылдары йәнгә
Булды дауа.
Йәнемә мең рәхмәтлемен -
Ямғыр яуа...

### Хәтер ҡалыу

Хәтер ҡалыу ни икәнен
Белдең инде хәҙер.
Йәшен атып, көйгән ағас -
Шул ул ҡалған хәтер.

Тамыры һулыған гөл ул,
Дымы бөткән тупраҡ.
Ҡояш, иртән сығып, кире,
Байып барған һымаҡ.

Өмөтөңдөң офоҡтарға
Китеп олағыуы.
Һүҙҙәреңдең, был донъяға
Тыумай, юғалыуы.

Йәшендән ҡалған ҡарт ағас -
Көлгә ҡалған хәтер.
Хәтер ҡалыу ҙа - яныу ул,
Ни эшләрһең хәҙер?..

Хәтер ҡалыуҙы бит тәүгә
Кисереүҙәрең был.
Аңланыңмы? Хәтер ҡалыу -
Киреп тартылған ҡыл.

Һаҡһыҙ ҡағылдыңмы, шартлап,
Өҙөлөргә тора.
Хәтере ҡалғандарҙан һин
Тәүҙә - хәлен һора.

### Сыныҡтырҙы донъя

Мин һиңә тик рәхмәт уҡыйым ул,
Бер рәнйешем, бына бер үпкәм юҡ.
Тәүҙә ауыр ине, хәҙер, шөкөр,
Мин - күктәрҙә!
Минең ҡанаттар - ныҡ!

Оса алмаҫ, тигәнһеңдер инде,
Ҡанаттарым имгәнгән дә көйө.
Белмәгәйнеңме ни, ҡанаттарҙың,
Тураҡланһалар ҙа, үҙ көйө.

Талпынырлыҡ ҡына көсө булһын,
Шыуышырлыҡ ҡына йә аулаҡҡа.
Туҡтап, хәл ала ла, йәнә - үргә,
Хәлдәренә күнә буламы һуң,
Анау һынлы үрҙәр яулағанда.

Әйҙә, ҡан һарҡыһын, һыңар булһын,
Ҡанаттарҙың, бар(ы)бер, үҙ көйө.
Дауа булмаһа ла, көс өҫтәй ул,
Дауылдарҙа ҡыйралғандан аҙаҡ,
Бәр(е)лә-һуғ(ы)ла нығып киткән йөйө.

Тураҡланған ерҙән тороп киттем,
Бер рәнйешем, бына бер үпкәм юҡ.
Дауылдарҙан ҡурҡыу бөттө инде,
Сыныҡтырҙы донъя - ҡанаттар ныҡ.

### Кем - кемде?

Күңелгә бер инеп оялаһа,
Һөйөүме ул, һағыш йә иһә үс.
Күрәшәләр икән кем - кемде, тип,
Һәр береһе - үҙе шундай ҙур көс!

Йәнәһе лә, һағыштарын еңә -
Үс өҫтөнән һөйә була берәү.
Һөйөү менән һағыш - бер түшәктә,
Ә үскә һуң - ҡайһыныһы терәү?

Һағышыңды, һөйөп, нескәртәһең,
Үсләшеүҙән һағыш бүҫкәрмәй ул.
Үс зурая, һағыш кесерәймәй,
Һағыш менән һөйөү иҫкермәй ул.

Һөйөү үҙе - һағыш кеүек бит ул,
Һағышландыра ул йәр һөйөүҙәр.
Һөйөү булған ерҙә һағыш - һаҡ ул,
Йәрең - йәнең өсөн ут - көйөүҙәр.

Һөйөп, һағышыңды була баҫып,
Һәм, үсте лә, һөйөп, була еңеп.
Үс һөйөүҙе еңмәй, үлтерә лә,
Һағыш итеп һалып ҡуя төрөп.

### Төш

Төшө-ние менән бөгөнгө төн
Йәһәннәмгә ниңә олаҡмай?
Йылан саҡҡан аяҡ түгел, хәҙер
Йәнгенәйем тотош һулҡылдай.

Төштәремдә берәү өлгөрҙө ул,
Тик, йыландың һурып ағыуын,
Алған саҡта, ҡарағыһыҙ булып,
Шешеп өлгөргәйне аяғым.

Ҡара шеш бөткәнсе, аяғымдың
Ул һурҙы ла һурҙы ағыуын.
Оноттом да кеүек, хатта, ҡайһы
Аяғымды йылан сағыуын.

Йылан үҙе, ҡурҡмай-өркмәй генә,
Үлән араһына шыйланы.
Янымдағы берәү, ул мәхлуҡҡа,
Ҡул күтәрергә лә ҡыйманы.

Дәрәжәһен белеп инеп китте,
Һоҡланырлыҡ, аһ, ул ҡиәфәт!..
Шул тиклем үк осһоҙ микән ғүмер,
Тел осонда ғына бит афәт...

Шып-шым ғына, албырғатып ҡына,
Үлем йөрөй матур бер һында.
Иҫкәртеүҙер, бәлки, бынан ары,
Һағыраҡ, тип, йөрө юлыңда...

Ә төшөндә, яҙ ҙа - һыуға ташла,
Утҡа ташла - йола өйрәтте.
Ыу-ағыуҙан дарыу яһай торған
Беләһең бит, тине, ҡөҙрәтте.

Һөйләгәндә, утҡа тығып алдым,
Һыуға манып алдым төшөмдә.
Рәхмәт әйтер инем ос(о)ратһам,
Миңә тейеш ағыуҙы ла һурған
Төшөмдәге теге кешемдә.

### Кәбән

Ышанаһығыҙмы, юҡмы -
Минең кәбән ҡойғаным бар!
"Кәбән ҡойҙом!" - тигән уйҙы
Беләк менән тойғаным бар.

Аяҡ менән тойғаным бар,
Тапағанда, бейеп-бейеп.
Аҫтағыларҙың һәнәге
Ҡала һиңә тейеп-тейеп.

Тойғаным бар, ваҡыт еткәс,
Ослау мәле кәбәнеңде.
Ерҙәге һәнәктәр, гүйә,
Көтөп йөрөй әжәлеңде.

Йөрәк менән тойғаным бар,
Кәбәндең иң-иң осонда.
Ул бейеклек һәм бөйөклөк
Ҡал, тигәндәй, һин ошонда.

Ошонда, һин ҡойған кәбән
Һине күктә тотҡан саҡта.
Албырғатҡас шул яҫылыҡ
Нимә бар, тип, миңә ерҙә?..

Ултырғаным бар кәбәндең
Иң осонда, түбәһендә.
Өҫкә менгәс, уйлайһың бит,
Аҫҡа нисек төшәһен дә.

Тойғаным бар арҡа менән,
Шыуып, аҫҡа төшкән мәлдә.
Табандары ергә тейгәс,
Бөтәһен дә тоя бәндә...

Табандары ергә тейгәс,
Бөтәһен дә тоя бәндә.
Үҙ кәбәнен ослап ҡуйғас,
Ошо ерҙән китәһен дә...

✓ Боронғо зыяраттарҙағы ҡәбер таштарының һырты соҡорланып ҡуйылған. Шул соҡор эсенә йыйылған ысыҡ һыуын иртә таңда ҡоштар эсһен өсөн шулай ителгән, тигәнде ишеткәнем бар.



ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛАҒЫҘ...

## дөрөҫ туҡланһын

■ Һағыш, тәбиғәте буйынса, ҡурҡыу йәки шатлыҡ кеүек үк хис. Әммә быға са ул етерлек кимәлдә өйрәнелмәгән. Уотерлу университеты ғалимдары шуға ла тикшеренеүҙәр үткәргән. Күңелһеҙләнеү, һағыш өсөн әллә ниндәй сәбәп тә кәрәкмәй. Бәктиһән, ул кеше нимә менәндер ҡәнәғәт булмаһа, ҡыҙыҡһыныуы юғалһа, асыуы килгәндә барлыҡҡа килә икән. Кешенең аңы етерлек кимәлдә стимуллаштырылмай, шуға ла күңелһеҙләнеү кеүек тойғо "уяна".

■ Гүзәл заттың хужалыҡтағы башҡарған мең эше араһында өйҙә йыйыштырыу, уны таҙа тотоу ҙа бар. Был эш менән йыш шөғөлләнеү һәҙәмтәһендә ир-егеттәр менән сағыштырғанда, ҡатын-ҡыҙҙарҙа арҡа һәм муйын ауыртыуы 4 йылға иртәрәк барлыҡҡа килә икән. Йортто таҙартыу - ҡатын-ҡыҙ сәләмәтлеге өсөн зарарлы, был фәнни яҡтан раҫланған хәҙер.

■ Дезодорант ҡулланыу һәҙәмтәһендә яман шеш барлыҡҡа килеүе ихтимал. Женева университеты ғалимдары асыҡлауынса, был косметик продукттарҙағы алюминий тоҙҙары яман шешкә килтереүе бар. Даими дезодорант ҡулланыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың түштәрендә йышыраҡ шеш осрай. Швейцария ғалимдары әйтеүенсә, гел генә алюминий хлориды тәьҫирендә барлыҡҡа килгән шеш башҡа ағзаларға ла таралыусан. Быға тиклем ғалимдар быйндай хәүефте кире ҡаға ине, дезодорант етештереүселәр ҙә үҙ продукцияһының зыянһыҙ булыуын белдерәләр ине.

■ Сыр - кеше организмына файҙалы ризыҡтарҙың береһе, ти Дания ғалимдары. Копенгаген университеты өс ай буйына 139 кешене тикшергән. Улар өс төркөмгә бүленгән, беренсе төркөм көн һайын 80 грамм майлы сыр ашаған, икенсе төркөмдә сырҙың күләме шундай уҡ булған, тик ул майһыҙландырылған. Өсөнсө төркөм сыр урынына икмәккә джем һылап ашаған. 12 аҙнанан һуң барыһының да "яҡшы" һәм "насар" холестеринын тикшергәндәр. Беренсе төркөмдөң "яҡшы" холестерин кимәле иң юғары булған.

■ Бөгөн мәктәп уҡыусылары репетиторҙар менән күп шөғөлләнә. Тимәк, улар энергияны ла күберәк ҡуллана, был юғалтҡан энергияны кире тулыландырып торорға кәрәк. Шуға ла бала дөрөҫ туҡланырға тейеш. Диетологтар балаға күберәк емеш-еләк бирергә тәҡдим итә, сөнки уларҙың барыһы ла емештәр ярата. Кивиға өҫтөнлөк бирергә була, уны юҡҡа ғына "витаминдар келәте" тип йөрөтмәйҙәр. Киви иммунитетты нығыта, матдәләр алышыныуға йоғонто яһай. Кивинан тыш, манго ла файҙалы. Унда С витаминының тәүлек нормаһы бар. С витаминына папайя, әфлисун бай. Лимонлы сәй, лимонлы һыу ҙа кәрәк. Мәктәпкә бала үҙе менән банан, алма йөрөтә ала. Банан туҡлыҡлы, ул ҡан баҫымын түбәнәйтә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртә. Алма аппетитты аса, аш һеңдереү системаһы эшенә ыңғай йоғонто яһай. Грейпфрут аш һеңдереүҙе яҡшырта, организмда матдәләр алышыныуҙы көйләй. Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы үсмерҙәр грейпфрут ашап, тән массаһын кәметә ала. Йәйге осорҙа составында бета-каротин булған абрикостарҙы күпләп ашарға кәңәш ителә. Был матдә уҡыусы баланың күреү һәләтен яҡшырта. Йәшелсәләр араһынан кәбеҫтәгә, салат япраҡтарына, помидорға, бороҫҡа, һуғанға өҫтөнлөк биреү кәрәк.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# УҠЫМЫШЛЫЛАРҘЫҢ...

## Оло зыяраты



**Йылдар үтеп, тарих менән ҡыҙыҡһына башлағас, икешәр, өсәр зыяратлы ауылдарҙың күп булыуын белдем. Мәҫәлән, беҙҙең Ишембай районы Уразбай (Һәләүекбаш) ауылының өс зыяраты булған. Халҡыбыҙҙың ярымкүсмә тормош менән йәшәгән осорондағы яҙлау, йәйләү, көҙләү юлдарының араһы йөҙәр саҡрымдан да артып киткән. Шул сәбәпле йәйләү юлдарында ла зыяраттарҙың барлыҡҡа килеүе ихтимал.**

Быуаттар буйына халыҡ хәтерендә һаҡланып, әлеге көндә лә ҡәберҙәренә зыярат ҡылынған әүлиә ҡәберлектәре бик күп. Улар тураһында 2012 йылда сыҡҡан "Башҡортостан - әүлиәләр иле" тигән китаптан белеп була. Әүлиәләрҙән ҡала халыҡ үҙенең уҡымышлы, белемле кешеләренең ҡәберҙәрен хәтерендә һаҡлаған, тәрбиәләп килгән. Ошоға са мин бер төбәк халҡы уҡымышлыларының айырым зыяраты булғанын белмәнем. Бәктиһән, ул бар икән. Маҡар халҡына билдәле Ҡарауыл тауын тракторҙар менән билләтеп һөрөп, 1984 йылда ҡарағай үҫентеләре ултырттылар. Тау битләүендә бик матур итеп урман үҫте. 1990 йылда йәш ҡарағайҙарҙың бер өлөшө янып юҡҡа сыға. Ҡалған үҫентеләр ҙә 1993 һәм 1996 йылдарҙағы янғындарҙа янып һәләк була. Янған ҡарағайҙарҙы йығып, эшкә яраҡлы ағастарын ташыу Маҡар урман хужалығына йөкмәтелә. Ошо эште башҡарыуҙа ҡатнашҡан Ибрай ауылы егете Айҙар Мөхәммәтов быға нәмәләр һөйләне:

- Янған ҡарағайҙарҙы тау битендәге тигеҙерәк яланға һөйрәттек. Машиналарға тейәп бөткәндә аяҡ аҫтында яртылаш ергә күмелгән шаҡмаҡ ташҡа иғтибар иттем. Уны күмәкләп күтәреп, әйләндереп һалғас, ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған һүҙҙәрҙе күрҙек. Иғтибарлап ҡараһаҡ, ергә-тирәлә лә шундай таштар ята. Сәстәр үрә торҙо. Боронғо зыярат ҡәберҙәрен тракторҙар менән тапатып йөрөгәнбеҙ. Был урындан күпкә арыраҡ үҙебеҙҙең Ибрай ауылының зыяраты ята. Ул да боронғо зыярат. Бөгөнгә көндә лә мәрхүмдәрҙе шунда күмәбеҙ. Ләкин был урында ҡәберлектәр барлығын беҙ белмәй инек. Өйгә ҡайтҡас, күргәндәремде әсәйемә һөйләнем. Ул үҙенең олатай-өләсәйҙәре һөйләүенән был урынға бик боронғо замандарҙан Егән төбәге ауылдарының уҡымышлыларын, дин әһелдәрен килтереп ерләүҙәрен әйтте.

Билдәле булыуынса, Егән йылғаһына Һикәҙе, Рәүҙәк, Әрмет һәм Шиҙе йылғалары ҡушыла. Был Маҡар менән Әрмет ауылдары араһында ғына. 1700 йылдарҙан алып был төбәктә төпләнгән ауылдарҙы һанайыҡ: Бужә (Ғүмәр), Мүскә (Әрметрәхим), Маҡар, Ҡуҡырауыҡ, Ибрай, Кәбәс, Иҫәкәй, Һарғай, Айыткол, Дауыт, Әтекәй, Ишбулат, Рахманғол, Һабай, Ситйылға, Һаҙ, Баграш, Юлдашбай, Сәфәртуй... Урман эстәрендә утарҙар ҙа байтаҡ булған. Айҙарҙың әсәһе Фәниә инәй әйтеүенсә, был зыяратҡа күберәк Бужә, Мүскә ауылдары муллаларын килтереп ерләгән булғандар.

Яҙғандарҙы дәлилләү өсөн оло йәштәге олатай-өләсәйҙәр менән әңгәмәләштем. Ғүмәр ауылынан 91 йәшлек Маһиҡәмәр инәй Ҡарауыл тауында уҡымышлылар ерләнгәнен белмәнә лә, зыяраттың боронғолоғон иҫбатлаған һүҙҙәр әйтә алды.

- Элек-электән уҡымышлыларҙы юғарыраҡ тау биттәрендә ерләгәндәр. Сөнки ундайҙар аяҡ аҫтында ятырға тейеш түгел.

Боронғо зыяраттарҙағы ҡәбер таштарының һырты соҡорланып ҡуйылған. Шул соҡор эсенә йыйылған ысыҡ һыуын иртә таңда ҡоштар эсһен өсөн шулай ителгән, тигәнде ишеткәнем бар. Ысынлап та, зыярат Ҡарауыл тауының бейек һыртында урынлашҡан. Зыяратҡа менеп ҡарап йөрөгәндә ҡәбер таштарының һырттары соҡорло икәненә иғтибар иттем. Эсенә уның яҡынса ярты стакандай һыу һыйлыр.

Айҙар Мөхәммәтов атаһы менән булған бер ғәжәп ваҡиға тураһында ла һөйләне.

- Колхоздар булған заманда атайым ДТ тракторында көндәҙ Ҡарауыл тауының көнбайышында ятҡан яландарҙы һөрөп йөрөгән була. Бер саҡ трактор тауышын ишеп, ҡолағына бәләкәй балалар тауышы ишетелә икән. "Ай, Минияр, ай, Минияр, Минияр, Минияр..." Әйләнеп ҡараһа, һабанының өҫтөнә бәләкәй генә кешеләр ултырышып алып, ҡулдарын болғай-болғай ҡысҡырышалар, ти. Икенсе ҡарағанда улар юҡҡа сыға. Башҡа механизаторҙар ҙа ул яланда төндә ер һөрөп булмауын билдәләй. Йә тракторҙары тартмай, йә боҙола...

Ибрай ауылында йәшәп, бөгөнгә көндә 88 йәшен тултырған Маһирә инәй ҙә Ҡарауыл тауындағы зыяраттың бик боронғолоғон, унда дин әһелдәрен, уҡымышлыларҙы ерләгәндәре хаҡында һөйләне:

- Эйе, ул зыярат бик боронғо. Халыҡ араһында танылған һәм ҙурланған дин әһелдәре ерләнгән өсөн уны беҙҙең инәй, бабайҙар "Оло зыярат" тип тә атаны. Беҙгә күрше йәшәгән Мырҙабай мулланың ир-егеттәрҙе үҙенә саҡыртып әйткән һүҙҙәренә лә шаһитмын. Мулла бабай уларға: "Мине оло зыяратҡа ҡуймағыҙ. Минең ундағылар янында ятырлыҡ ләғәтем юҡ!"- тине (тимәк, етерлек дәрәжәлә дини белеме булмаған. - **Авт.**) Ул саҡта миңә 10 йәш тә тулмаған булһа ла, һүҙҙәре хәтерҙә ҡалған...

Төп Маҡар кешеһе 1935 йылғы Азат ағай Ишҡолов "Оло зыярат" тураһында белһә лә, унда уҡымышлыларҙың ерләнеүен аныҡ ҡына әйтә алманы. Әммә үҙе менән булған бер ваҡиғаны һөйләне:

- Маҡарҙа йәшәп донъя ҡуйған бер бабайҙы Оло зыяратҡа алып барып ерләйҙәр. Ул ҡарт: "Нәҫел-нәсәбем шунда ерләнгән, мине лә шунда ҡуйығыҙ",- тип үтенә. Уны ерләгәндә фронтовик Солтанов Шәрифулла исемле ағай ҙа була. Шул осорҙа тауҙың һыртына тигәндәй менеп ер һөргән тракторҙың һабаны әйләндереп килтереп сығарған шаҡмаҡ таш ялан ситендә ятҡан. Шәрифулла ағай ташта ғәрәпсә яҙылған юлдар күреп ҡала. Ә ул ғәрәпсә уҡый-яҙа белгән була. Һәм ташта яҙылғандарҙы башҡаларға ла уҡып ишеттерә. Азат ағай әрүәхтең исем-шәрифен онотһа ла, үлгән 1520 йылы хәтерендә ныҡ уйылып ҡала.

Ревиз документтарында Маҡар ауылы Һикәҙе йылғаһы буйында 1735 йылда теркәлә. Тимәк, Оло зыярат Маҡарҙан 200 йылға олораҡ булып сыға. Азат ағайҙың һөйләүҙәренән сығып, Оло зыяратҡа ерләү йолалары нуғышҡа тиклем һәм унан һуң да боҙолоп, теүәл үтәлмәгән була. Быны иһә Егән төбәгендә дини йолаларҙың онотола барыуы менән аңлатып булалыр. Айҙарҙың әсәһе 1933 йылғы Фәниә апай менән һөйләшеп ултырғанда ул түбәндәгеләрҙе бәйән итте:

- Миңә ул Оло зыярат тураһында күбергән әсәйем Хәсниямал Сәлих ҡыҙы һөйләне. Ә уға дини яҡтан белемле булған ҡәйнәһе Әминә һөйләп ҡалдырған, - тип кенә әйтә алды. - Нинә ололарҙың һөйләгәндәренә иғтибарлыраҡ булмағанбыҙ икән, аяҡ аҫтында ятҡан тарихыбыҙҙы юҡҡа сығарып бөткәнбеҙ, - тип үкенесен дә әйтеп ҡуйҙы. Уның һөйләүе буйынса, Ҡарауыл тауы итәгенә Егән төбәге уҡымышлыларын ғына түгел, хатта икенсе тарафтарҙан да килтереп ерләгәндәр икән.

Эйе, халҡыбыҙ үҙенең уҡымышлы, хөрмәтле кешеләрен ҙурлаған һәм улар ерләнгән зыярат урындарын киләсәк быуындарға ла билдәле итеп ҡалдырырға тырышҡан. Тарихи мәғлүмәттәрҙән билдәле булыуынса, башҡорт илендә үткән 1730-1755 йылдарҙағы ихтилалдарҙа ҡатнашҡандарҙың өстән ике өлөшө белемле, йәғни уҡый-яҙа белгән. Шул уҡ ваҡытта урыҫ һалдаттарының (карателдәрҙең) өстән бер өлөшө тиреһе генә уҡый-яҙа белгән. Тимәк, беҙҙең халыҡ аңлы-белемле кимәлдә ихтилалдарға күтәрелгән.

Әлеге эҙләнеүҙәрҙән шуны әйтер инем, иң тәүҙә бөтөн ҡалған ҡәбер таштарындағы яҙыуҙарҙы уҡып, зыяраттың ололоғон иҫбатлау кәрәктер, аҙаҡ иһә зыяратты кәртәләп алып, таштарын урындарына ҡайтарып, тәртипкә килтереү беҙҙең бурыстыр.

**Рәдис ДУСАЛИН,**
**һәүәскәр тарихсы, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы.**
**Ишембай районы.**

МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ



# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?

### Пәрей ҡыҙы

Мин бәләкәй саҡта атайым йыш ҡына үҙенең башынан үткәндәрҙе һөйләй торғайны. Беҙ ул ваҡытта Ырғыҙлы ауылынан 10-12 саҡрым арыраҡ ятҡан Тәтегәс ауылында йәшәй инек (хәҙер ул ауыл юҡ). Үҙе менән булған бер ғибрәтле хәлде былай тип һөйләне.

Бер ваҡыт көнө буйы урманда солоҡтарын ҡарап, бик арып, кискә табан ғына ҡайтып килә. Сәй эсә лә, йонсоғанға күрә, ял итергә ята һәм тиҙ үк йоҡлап китә. Әнер төшө башлай, малдарҙы тәрбиәләргә, һыйыр һауырға ваҡыт етә. Ҡояш байышы алдынан йоҡлаған ир кешенең янында кеше булырға тейеш, булмаһа, уны уятырға кәрәк. Сөнки уның эргәһенә пәрей йәки албаҫты килергә мөмкин. Әсәйем быны белгән. Сыҡыр алдынан уятырға итҡән, ләкин бик тәмле итеп йоҡлап ятҡас, йонсоп ҡайтҡандыр, тип уятмаған. Атайымдар ул ваҡытта хәлле генә торғандар, өс һыйыр, өс ат, күп кенә ваҡ малдары булған. Әсәйем мал-тыуар менән оҙаҡ ҡына булаша, инде ҡараңғы ла төшә. Ҡайтып инһә, атайым өйҙә юҡ. Киске аш әҙерләп көтә, ә атайым юҡ. Күршеләргә-фәлән инеп, һөйләшеп ултыралыр, тип уйлай. Шәмгә ут ала, атайым һаман юҡ икән. Көтөп-көтөп ҡайтмағас, йоҡларға ята. Төн уртаһында соланда ишетелгән тауышҡа уянып китә. Ҡурҡһа ла, шәмгә ут алып, ишеккә асып ҡараһа, иҙәндә һуҙылып төшөп бераү ята. Әсәйем бик ҡурҡа, шулай ҙа яҡын килеп ҡарай һәм атайымды таный. Нисек кәрәк, һөйрәп, өйгә индерер һала. Эскән, тип әйтер инең, оҡшамаған, еҫе лә сыҡмай. Ул ваҡытта эске тигән нәмә булмаған, атайым уның кеүек нәмә менән шаярмаған да. Күҙҙәре, ғәҙәттәгесә, үҙ аңында, тик бер нәмә лә әйтә алмай, телһеҙ ҡалған икән. Ымлап һөйләшеп ҡарайҙар, ләкин бер-берсен аңламайҙар. Иртәгәһенә ҡарттар йыйылып, атайымды ҡарайҙар һәм мулла саҡыртырға ҡушалар. Ул ваҡытта Ҡотан ауылында Ғилман исемле бик көслө мулла була, үҙен күрәҙәсе мулла, тип йөрөткәндәр. Шәп ат егеп, тиҙ үк барып та етәләр.

- Ни өсөн килгәнегеҙҙе беләм, Дәүләтхужаның эштәре хөрт, киттек тиҙерәк, - ти мулла һәм шул ыңғайы атҡа сыға һалып ултыра.

Өйгә ингәс, атайымды ҡарай, уның ымлауҙарын шунда уҡ аңлап ала.

- Иренде пәрей алып китә яҙҙы, ул уға ҡаршы һуғышты, өс ҡабырғаһы һыныҡ, - ти ул әсәйемә.

- Телгә килгәс, үҙе һөйләр, - ти ҙә, өшкөрә башлай. Мулла пәрейҙәр көсө менән оҙаҡ алыша, өс көн үткәс, атайым телгә килә. Кешеләр йыйылып китә, ни күргәнен үҙе һөйләһен, тип, мулла атайыма һөйләргә ҡуша. Атайым һөйләргә ҡурҡа.

- Һөйлә, ҡурҡма, - ти мулла. Шунан һуң атайым түкмәй-сәсмәй барыһын да һөйләп бирә:

- Йоҡлап ята инем. Кемдер төртҡәнгә уянып киттем. Ҡараһам, эргәмдә бик сибәр бер ҡатын тора. Үҙе инәнән тыума ялангас, сәстәре оҙон, теҙҙәренә етеп тора. Имсәктәре - уңы һул яҡ яурынға, һулы уң яҡ яурынға һалынған, үҙе бер нәмә лә өндәшмәй. Шым ғына эргәмә килеп ятты, үҙ теләгенә ирешмәксе була. Мин торҙом да, ҡулынан тотоп, урындыҡтан иҙәнгә һөйрәп төшөрҙөм. Ҡатын ҡәүҙәгә бик таҙа, көслө, минең һөйрәүгә бирешмәй. Доға уҡыйым да, өшкөрәм, сығып кит, тим, ләкин ул сыҡмай. Нисек тә ишек тәбәненә тиклем килтерҙем. Тик ишек аша бер нисек тә сығарып булмай, һуҡһам - ҡаршы һуғыша. Көрмәкләшә торғас, ҡаты ғына итеп һуғырға өлгөрҙөм һәм йән көскә типтем. Теге ҡатын да ҡарап торманы, бик көслө итеп үҙемде ишек яңағына ҡуша һуҡты. Мин иҫтән яҙғанмын. Уянып китһәм, һарай артында, эске күлдәктән генә сүп-сар өйөмө өҫтөндә ятам. Күҙ көнө, ҡырау төшкән, бик ныҡ өшөгәнмен, торайым тиһәм, тәнде ҡыбырлатып та булмай. Былай булһа, туңам бит, нисек тә булһа өйгә ҡайтырға кәрәк, тип уйлайым. Һарай өйҙән байтаҡ ҡына алыҫлыҡта. Түш менән әкрен генә шыуып, нисектер соланға индем, ләкин ишекте туҡылдатып булмай, хәл юҡ. Ярай әле, ҡатыным ҡыштырлауҙы ишеткән...

- Бына, күрҙегеҙме, мин әйткәнсә булған бит эш. Хәлдең нисек булғанын мин белдем. Уның эргәһенә пәрей ҡатыны килгән. Әгәр уның теләгенә риза булһаң, бөттең - мәңгегә был донъянан китер инең. Шуға күрә, уға ҡаршы торорға, доға уҡып төкөрөргә кәрәк. Пәрейҙәр ояны бынан алыҫ түгел, бер мәмерйәлә. Дәүләтхужаның өс ҡабырғаһы һынған. Пәрей көсөн доға уҡып бөтөрҙөм, оҙаҡламай аяҡҡа баҫыр, - тине лә мулла ҡайтып китте.

"Ике-өс көн яттым да, тороп та киттем, тик ҡабырғаларым дөрөҫ уңалманы", - тип, үҙенең сурайып торған ҡабырғаларын күрһәтә торғайны атайым. Шундай хәлдәрҙә бер ваҡытта ла юғалып ҡалырға, ҡурҡырға, пәрей теләгенә риза булырға ярамай. Белгән доғаларыңды уҡып, нисек булһа ла ҡыуырға кәрәк, тип өйрәтә торғайны.

**(Был ваҡиға Бөрйән районы Ырғыҙлы ауылы кешеһе Искужин Харис Дәүләтхужа улынан яҙып алынды. 1935 йылғы ине. Күптәндән вафат булды).**

**Рауил АСИҒОЛОВ.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

Әгәр беҙ күнегелгән уңайлылыҡ зонаһынан сығырға теләйбеҙ икән, уңайһыҙлыҡтар менән дуҫлашырға тура киләсәк. Хуплау ихтыяжынан баш тартырға ҡарар иткәс, һуңғы маҡсатҡа барып етеү юлында күпме хата эшләүебеҙ мөһим түгел. Томас Эдисон электр лампаһын уйлап тапҡанға тиклем тиҫтәләрсә мең тәжрибә үткәргән. Әммә ул бер ваҡытта ла ҡул һелтәп ҡуймаған һәм тәжрибәләрен бушҡа булды тип уйламаған. Киреһенсә, асышының ни өсөн эшләмәгәненең 9999 уңышлы сәбәбен таптым, тигән. Беҙ ныҡышмалылыҡ тураһында һөйләйбеҙ. Был энергиялы сифат уңышлы кешеләрҙе уңышһыҙҙарынан айырып ала: акыллылыҡ, интеллектлылыҡ, белемде, хатта тәжрибәне алмаштыра. Ныҡышмал кешеләр тирә-яҡтағыларға ла, хәл-торошҡа ла, эске шарттарға ла үҙ юлдарында торорға рөхсәт итмәй. Был турала билдәһеҙ автор былай тигән: "Донъяла бер нәмә лә ныҡышмалылыҡты алмаштырмай. Уны талант та алмаштыра алмай. Талантлы уңышһыҙҙарҙан да ғәҙәти нәмә юҡ. Уны гений ҙа алмаштырмай. Баһаланмаған аҡыл әйәһе тураһында хатта мәҡәл бар. Уны белем дә алмаштыра алмай. Донъя белемле мөртәттәр менән тулы. Ныҡышмаллыҡ һәм маҡсатҡа ынтылышлылыҡ - бына нимә беренсел".

### Көтөү ҡануны

Психологик тикшеренеүҙәр күп тапҡырҙар кешелек уңышының төп сәбәбе - уны көтөү икәнлеген күрһәтә. Рекордтар ҡуйыусы спортсылар енеү көтә. Мәҫәлән, Мөхәммәд Али - барлыҡ замандарҙың бөйөк боксерҙарының береһе буласаҡ енеүе тураһында былай тип белдергә: "Бөгөн кисен мин енеү яулағас...". Иғтибар итегеҙ, ул бер ҙә:"Әгәр енеү яулаһам...", - тимәй. Бына ошо була инде үҙ-үҙеңә абсолют ышаныу.

Аристотель: "Нимә көтәһегеҙ, шуға әйә буласаҡһығыҙ", - тигән. Көтөү һеҙҙең тормошоғоҙҙо контролдә тота, бына ни өсөн үҙегеҙҙең көтөүегеҙҙе контроллөү мөһим. Әгәр яҡшы һөҙөмтәгә ышанып, шуны көтһәгеҙ, тормошоғоҙ ла тик яҡшы нәмәләрҙе генә тартып килтерәсәкһегеҙ. Әгәр насарлыҡты көтһәгеҙ, тап ошо көтөүегеҙ тормошҡа ашасаҡ та инде. Кире уйҙарға тормошоғоҙ менән идара итергә рөхсәт биреп, һеҙ даими рәүештә кире һөҙөмтәләр көтөү ғәҙәтен формалаштыраһығыҙ. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, кире һөҙөмтә көтөү планета халҡының 90 проценты-на хас. Һеҙгә быны менән килешеү ауыр булыр, әммә ҡартайыуығыҙҙы көткән өсөн ҡартаяһығыҙ ҙа инде. Сөнки билдәле бер йәшкә еткәс, ҡартая башлаясаҡмын, тип программалаштанһығыҙ. Был ваҡытта төпкә аңығыҙ оло йәштәге кешенең мөнәсәбәтен, манераһын, кейенеүен, симптомдарын үҙләштерә. Филдәрҙең үлемен алдан һиҙеү инстинкты бар. Улар ошо ваҡытты тойғас, "филдәр" ҡәберлеген эҙләп, сәйәхәткә сыға. Кешеләрҙең күбеһе үҙен шулай тота.

Абсолют ышаныс ыңғай көтөү арҡаһында барлыҡҡа килә. Ыңғай көтөү теләһә ниндәй ҡаршылыҡтарҙы һәм ҡатмарлыҡтарҙы еңеп сыға алырлыҡ эске көсөгөҙ булыуы тураһындағы белемгә нигеҙләнеп формалаша. Күптәрҙе үткәндәр тартып тора. Улар сувенирҙарҙы, киҫеп алынған һүрәттәрҙе, иҫке хаттарҙы һәм ваҡ-төйәкте һаҡлай. Бында бер ниндәй насарлыҡ юҡ, әммә уңышҡа ынтылаһығыҙ икән, аныҡғы булғанға түгел, ә киләсәккә төбәлергә тейеш. Сувенирҙар, иҫке хаттар һаҡлағанды, киләсәктә ҡайҙа барырға һәм кем булырға теләүегеҙ тураһындағы һүрәттәр ҡуйылған альбом эшләгеҙ. Киләсәккә өмөт менән бағыһыҙ һәм дәрт өҫтәүсе ғәмәлдәр ҡылығыҙ. Энтузиазм - ҡеүәтле көс һәм уңыштың бөйөк серҙәренең береһе. "Энтузиазм" грек телендәге ике һүҙҙән тора - en - һеҙҙә, theos - Аллаһ. Йәғни энтузиазм - "Аллаһ һеҙҙә" тигәнде аңлата. Тап ошо һеҙҙәге Аллаһ көсө, әгәр уны динамикалы фекерләү ярҙамында азат итеүгә өлгәшһәгеҙ, теләгән нәмәгеҙҙе тормошҡа ашырырға ярҙам итәсәк.

**Роберт ЭНТОНИ.**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ЯҢЫ ЙЫЛ, МӨХӘРРӘМ АЙЫ ҺӘМ ҒӘШҮРӘ КӨНӨ



**Мосолман йыл иҫәбе буйынса яңы 1438 һижри йыл 2 октябрҙән мөхәррәм айы менән башланды. Мөхәррәм айының 10-сы көнөндә мосолман донъяһы Ғәшүрә көнөн билдәләй. Быйыл Ғәшүрә көнө 11 октябргә тура килә.**

Йәннәттән ергә төшөрөлгән Әҙәм ғәләйһиссәләм һәм Һауа Аллаһы Тәғәләгә: "Раббыбыҙ! Беҙ үҙ-үҙебеҙгә золом ҡылдыҡ, һәм әгәр беҙҙе ярлыҡамаһаң һәм рәхмәт ҡылмаһаң, беҙ зыян күреүселәрҙән буласаҡбыҙ", - тип доға ҡылдылар. Аллаһы Тәғәлә уларҙың доғаһын ҡабул итте һәм хаталарын ғәфү итте. Ҡайһы бер фараздар буйынса, был тап Мөхәррәм айының 10-сы көнөнә, йәғни Ғәшүрә көнөнә тура килә. Аллаһы Тәғәләнең бөйөк хикмәте менән был көндә бәйғәмбәрҙәр һәм әүлиәләр менән бәйле күп тарихи ваҡиғалар була. Әҙәм бәйғәмбәрҙең доғаһы ҡабул ителеүҙән тыш, тап ошо көндә Нух ғәләйһиссәләм, сәхәбәләре менән туфандан ҡотолоп, оҙаҡ ҡына ваҡыт диңгеҙҙә йөҙөп йөрөгәндән һуң, кәмәләре менән ярға килеп туҡтала. Муса ғәләйһиссәләм фирғәүен эҙәрлеклеүенән ҡотола, Аллаһы Тәғәләнең әмере буйынса Муса бәйғәмбәр үҙ халҡы менән үткәндә диңгеҙ асыла, ә уның артынан баҫтырып килгән залимды ғәскәре менән һыу йота. Шулай уҡ Юныс бәйғәмбәр ҙур балыҡ эсенән сығарыла. Раббыбыҙ Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе һәм сәхәбәләрҙе кафырҙарҙың зыянынан һаҡлап алып ҡала. Мөхәррәм айының 10-сы көнөндә Раббыбыҙ Күкте, Ерҙе, Күрсине, фәрештәләрҙе, беренсе кеше Әҙәмде яратты. Һәм Ҡиәмәт көнө лә Ғәшүрә көнөнә тура килгән йөмала буласаҡ.

Мөхәммәт бәйғәмбәр Мәҙинә ҡалаһына хижрәт эшләгәндән һуң, йәһүдиҙәрҙең ошо көндә ураҙа тотоуына шаһит була. Ул был ғибәҙәтте ни өсөн был көндә үтәүҙәренең сәбәбен һорай. Йәһүдиҙәр: "Был изге көн, был көндә Аллаһы Тәғәлә Исраил улдарын дошмандарынан ҡотҡарған, шуға күрә Муса ғәләйһиссәләм ураҙа тота башлаған", - тинеләр. Быны ишеткәс, Бәйғәмбәр: "Мин Мусаға нығыраҡ яҡынмын", - тип, үҙе ошо көндә ураҙа тота башлаған һәм сәхәбәләренә лә ошо ғибәҙәтте үтәргә бойорған.

Бер хәҙистә: "Рамаҙан айынан ҡала ураҙа өсөн иң яҡшы ай мөхәррәм, ә фарыз намаҙҙарҙан һәм тәһәджудтән ҡала иң яҡшы намаҙ - Ғәшүрә көнөндә ҡылынған намаҙ", - тип әйтелә. Икенсе хәҙистә әйтелеүенсә, Бәйғәмбәребеҙ: "Ғәшүрә көнөндәге ураҙа өсөн Аллаһы Тәғәлә үткән йылдың гонаһтарын ярлыҡар, тип өмөт итәм", - тигән. Бәйғәмбәр сөннәтенә ярашлы, Китап әһелдәренә (йәһүдиҙәргә һәм насраниҙарға) оҡшамаҫ өсөн Ғәшүрә көнөнән тыш, йә бер көн алдан, йә бер көнгә һуңынан, ике һәм унан күберәк көн ураҙа тоторға кәрәк.

**Мораҙым МӨХӘМӘТОВ әҙерләне.**

✓ "Салауат Юлаев" иһә "Металлург"ҡа бер-бер артлы 3 шайба "бүләк" итте. Шулай итеп әлеге уйын миҙгелендә юлаевсылар тәүге тапҡыр алышты үҙ файҙаһына ҡоро иҫәп менән тамамланы. Матч һөҙөмтәһе - 0:3.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ҠАРАСАЙҘА ТЫУҒАНДАР




Фәүзиә Иҙелбаева төҙөнө.

**33-сө һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Китап. Ғәрәсәт. Маҡан. Махно. Хилаф. Биишева. Гуслица. Наҙан. Мажара. Нәфсе. Ат. Аҡбур. Азат. Нужа. Лимон. Итака. Сара. Тарауыл. Немец. Исҡужин. Турыҡай.

**Вертикаль буйынса:** Гимназия. Мостафина. Интернат. Ғайн. Артист. Обама. Кәрим. Ашата. Уҡыусы. Ҡашмау. Аусы. Ала. путин. Инәй. Хан. Атлан. Аныҡ. Асыу. Фән. Ранец.

ХОККЕЙ

# ЮЛАЕВСЫЛАР...

## һөйөндөрә лә, көйөндөрә лә

**Континенталь хоккей лигаһы уйындары ҡыҙғандан-ҡыҙа. Боҙ майҙандарындағы алыш көсөргәнешлеген хатта телевизор экрандары аша ла тойорға мөмкин. "Салауат Юлаев" хоккей командаһы егеттәре лә уйын ҡомарын һүндермәйенсә һәр осрашыуҙа мәрәйҙәр һанын арттырыу өҫтөндә етди эшләй.**

Ләкин уңыш ҡайһы саҡта Игорь Захаркин командаһын урап үтә. Шулай Өфөлә "Медвешчак" менән уҙған матч, юлаевсыларҙың тырышлығына ҡарамайынса, ҡунаҡтар файҙаһына тамамланды. Төп уйын ваҡыты осрашыуҙың еңеүсеһен асыҡламаны, өҫтәлмә минуттарҙа ла командаларға мәрәй килтермәне. Буллитта иһә "Медвешчак" сосораҡ булып сыҡты. Уйын иҫәбе 4:5.

Ситтәге тәүге уйынды юлаевсылар Новокузнецкиҙың "Металлург"ы менән уҙғарҙы. Алыш барышында ике команданың да тик еңеүгә ынтылғанын күрергә мөмкин ине. Ләкин хужалар, нисек кенә тырышмаһын, Андрей Гаврилов ҡапҡаһын "аса" алманы. Ә "Салауат Юлаев" иһә "Металлург"ҡа бер-бер артлы 3 шайба "бүләк" итте. Шулай итеп әлеге уйын миҙгелендә юлаевсылар тәүге тапҡыр алышты үҙ файҙаһына ҡоро иҫәп менән тамамланы. Матч һөҙөмтәһе - 0:3.

Омскиҙың "Авангард"ы ла "Салауат Юлаев"тың ҡыҫымына ҡаршы тора алманы. Иҫәпте хужалар асһа ла, артабан уйын дилбегәһе тик юлаевсылар ҡулында булды тиерлек. Уйын аҙағында табло, ҡунаҡтар файҙаһына, 2:5 иҫәбен күрһәтә ине.

Новосибирскиҙа ла юлаевсылар алдағы уйын темпын юғалтманы. Тему Хартикайненның ике голына "Себер" хоккейсылары тик бер генә шайба менән яуап ҡайтара алды. Шулай итеп, тағы ла бер ышанысы еңеү - 1:2.

Әлегә тиклемге уйындар Өфө командаһының буллитта әллә ни көслө түгел икәнлеген күрһәтә. Магнитогорскиҙың "Металлург"ы менән булған уйында ла нәҡ буллит буйынса хужалар еңеү яуланы. "Металлург" уйын барышында иҫәпте, үҙ файҙаһына, икегә еткерҙе. Ләкин юлаевсыларҙың ҡулдарын төшөрмәй, бер-бер артлы һөжүм итеүҙәре иҫәпте тигеҙләргә мөмкинлек бирҙе. Өҫтәлмә уйын ваҡыты ике яҡ өсөн дә һөҙөмтәһеҙ булды. Буллиттан һуң уйын иҫәбе 2:3.

Гөлназ САФУАНОВА.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Октябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (9) дүшәмбе | 6:07 | 7:37 | 13:30 | 16:57 | 18:27 | 19:57 |
| 11 (10) шишәмбе | 6:09 | 7:39 | 13:30 | 16:55 | 18:25 | 19:55 |
| 12 (11) шаршамбы | 6:11 | 7:41 | 13:30 | 16:52 | 18:22 | 19:52 |
| 13 (12) кесе йома | 6:13 | 7:43 | 13:30 | 16:50 | 18:20 | 19:50 |
| 14 (13) йома | 6:15 | 7:45 | 13:30 | 16:47 | 18:17 | 19:47 |
| 15 (14) шәмбе | 6:17 | 7:47 | 13:30 | 16:45 | 18:15 | 19:45 |
| 16 (15) йәкшәмбе | 6:19 | 7:49 | 13:30 | 16:43 | 18:13 | 19:43 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**8 октябрь "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович), драма

**9 октябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.)

**9 октябрь "Итекле бесәй"** (Ш. Перро), әкиәт

**11 октябрь "Ҡаһым түрә"** (Б. Бикбай, Х. Ирғәлин), драма

**12 октябрь "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл

**13 октябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса)

**14 октябрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**9 октябрь "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. 12.00

**13 октябрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия

**14 октябрь "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**13 октябрь "Йөрәктәрҙә һүнмәҫ ялҡын бар!".** Бейеү театры, "Ашҡаҙар" башҡорт эстрада-фольклор төркөмө

**14 октябрь "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**13 октябрь** М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры гастролдәре. **"Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия

**14 октябрь "Минең ҡәйнәм - әүлиә"** (С. Белов), комедия

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылған уҡыусыларыбыҙҙың тәҡдимдәрен һәр һанда күрһәтә киләбеҙ. Бөтәһе лә уҡырға тейешле китаптар исемлеге яйлап үҫә бара. Әлегә ул бына ниндәй:**

**1. "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы**
**2. М. Аҡмулланың шиғырҙар йыйынтығы**
**3. Ҡол Ғәли "Йософ ҡиссаһы"**
**4. Ризаитдин Фәхретдин "Нәсихәттәр"**
**5. Ғайса Хөсәйенов "Тормош" һәм "Донъя" парсалар китаптары**
**6. Шәйехзада Бабич, "Ғазазил" поэмаһы, шиғырҙар**
**7. Зәйнәб Биишева "Яҡтыға" трилогияһы**
**8. Һәҙиә Дәүләтшина "Айбикә" повесы**
**9. Әхмәтзәки Вәлиди "Хәтирәләр"**
**10. Һәҙиә Дәүләтшина "Ырғыҙ" романы**
**11. Мостай Кәрим, "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесы һәм поэзияһы**
**12. М. Ғафури "Фәҡирлектә үткән тереклек" хикәйәһе**
**13. М. Ғафури "Шағирҙың алтын приискыһында" повесы**
**14. Ғ. Хәйри "Боролош" романы**
**15. Әхиәр Хәкимов "Өйөрмә" романы**
**16. Ноғман Мусин "Мәңгелек урман"**

***Өфө ҡалаһының 18-се мәктәбе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әлфиә Зәбдинова яҙған хаттан өҙөк:*** "Ғәлимов Сәләмдең "Бала" поэмаһын да ошо "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә индерергә кәрәк. 1940 йылда баҫылып сыҡҡан был әҫәр бөгөнгө йәштәр өсөн дә фәһемле, кәрәкле һәм актуаллеген юғалтмаған. Поэмалағы төп геройҙар - Сәйҙел менән Зәйнәптең ғаилә тормошо, уларҙың балаға ҡарата мөнәсәбәте тураһында уҡып, күптәр фәһем алыр, тормошҡа ҡараштарын үҙгәртер. Бөгөн дә йәштәр араһында Әршиткә оҡшаған кешеләр аҙмы ни? Ғәлимов Сәләмдең әхлаҡ, ғаилә тураһында яҙылған әҫәре бөгөн дә бик уҡымлы булырға тейеш, минеңсә"...

***Ошо уҡ әҫәрҙе уҡыусыбыҙ Тәнзилә Бикбаева ла тәҡдим иткәйне:*** "Ғәлимов Сәләмдең "Бала" поэмаһы башҡорт поэзияһына бер яңылыҡ булып килеп инә. Яңы ғына тыуған саф мөхәббәтле ғаилә бала тәрбиәләүгә яңы ҡараш менән баға. Шул мәлдә Әршит атлы Сәйҙелдең элекке дуҫы ҡайтып төшә һәм йәш ғаиләнең уй-теләктәрен селпәрәмә килтерә. Әршит йәш саҡта үҙең өсөн генә йәшәп ҡалырға кәрәк, тигән һүҙҙәр менән Сәйҙел күңеленә ҡотҡо һала. Ул Зәйнәпте баланан баш тартырға мәжбүр итә, әммә йәшәй-йәшәй балаһыҙ тормоштоң йәме юҡлығына инана. Автор йәштәргә тәрбиә биреү маҡсаты менән поэмала һүрәтләнгән йәш ғаилә миҫалында фәһем алырға саҡыра..."

**Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына һеҙ ҙә ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-иңдәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!**

**Иҫкәрмә: аңлағанһығыҙҙыр, был исемлек башында барыбер ҙә әҙәбиәтебеҙҙең классиктарының, аҡһаҡалдарының әҫәрҙәре урын алырға тейеш. Мәктәптә уҡыған ул әҫәрҙәр барыбер ҙә күңелегеҙҙә һаҡланалыр - шуларҙы барлайыҡ тәүҙә, ә бөгөнгө быуын яҙыусыларының әҫәрҙәре тураһында саҡ ҡына һуңыраҡ, исемлек аҙағына етә башлағас һөйләшербеҙ.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## "ЙАТАҒАН"ДАР СЫҒЫШЫ



2016 йылда ТӨРКСОЙ-ҙың Даими советының XXXIII ултырышында Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Төркмәнстан һәм Үзбәкстандың бойондороҡһоҙлоғонoң 25 йыллығын байрам итеү тураһында ҡарар ҡабул ителгәйне. Уның сиктәрендә йыл дауамында бер нисә халыҡ-ара проект тормошҡа ашырыла.

Ошо билдәле датаға арнап, төрлө ҡалаларҙа һәм илдәрҙә сәнғәт оҫталары ҡатнашлығында концерттар үтә. Унда Башҡортостан исеменән "Йатаған" этно-төркөмө һәм ҡурайсы Юлай Ҡасимов сығыш яһай. Музыканттар айырым да, берләштерелгән оркестр менән дә уйнай. Тәүге концерт 27 сентябрҙә Ҡаҙағстандың Талдыҡурған ҡалаһында уҙҙы. 3 октябрҙә программа Анкарала Президент симфоник оркестрының концерт залында күрһәтелде. Унда 10 илдең артистары сығыш яһаны. Йыйылыусыларҙы ТӨРКСОЙ-ҙың Генераль секретары Дуйсен Касейнов сәләмләне. Артабан артистарҙы Измир (Төркиә) һәм Гирне (Төньяҡ Кипр) көтә.

## КӨТТӨРӨЛГӘН ҺӘЙКӘЛ



Өфөлә Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Зәйнәб Биишеваның һәйкәлен асыу тантанаһы була. Сара 14 октябргә билдәләнгән. Унда яҙыусының хеҙмәттәштәре, туғандары һәм яҡындары, Мәскәүҙә йәшәгән улы Тельман Әминев ҡатнаша.

Бейеклеге өс метрға яҡын бронза һындың скульпторы - Владимир Дворник. Һәйкәл яҙыусының исемен йөрөткән "Китап" нәшриәте һәм Өфө һөнәрҙәр һәм сервис колледжы эргәһендә урынлашҡан. "Һәйкәлдең һөнәрҙәр колледжы алдында ҡуйылыуы ҙур мәғәнәгә эйә, - тип билдәләне Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай. - Зәйнәб Абдулла ҡыҙының "Һөнәрсе һәм өйрәнсек" тигән әҫәре бар". Әле һәйкәл янындағы биләмәне төҙөкләндереү буйынса эштәр бара. Был урында эскәмйә һәм фонарҙар ҡуйыла, газондар төҙөлә. Сквер Зәйнәб Биишева исемен йөрөтәсәк.

## ЯҢЫ ПРЕМЬЕРА




М. Ғафури исемендәге Башҡорт драма театрында Жан Ануйҙың пьесаһы буйынса ҡуйылған "Антигона" драмаһының премьераһы үтте. Милли сәхнәлә был әҫәр беренсе тапҡыр ҡуйыла, уны башҡорт теленә Факил Мырҙаҡаев тәржемә иткән.

Белгестәр билдәләүенсә, спектакль сағыу актер эштәре менән тамашасылар хәтерендә ҡаласаҡ. Театрҙың художество етәксеһе, танылған актер Олег Ханов Креонды башҡара. Тамашаға билдәле һәм йәш актерҙар йәлеп ителгән: Алмас Әмиров, Гөлмирә Исмәғилева һәм Гөлназ Хайсарова (Исмена), Алһыу Ғәлина-Ғафарова (Һөт әсәһе), Илсур Байымов (Гемон), һаҡсылар (Илдар Сәйетов, Азамат Ғафаров, Юнир Ҡоланбаев), Креондың хеҙмәтсеһе (Айнур Ситдиҡов). Геройҙар бурыс һәм кешелек дәрәжәһе, мөхәббәт һәм нәфрәт, йәшәү өсөн үлем кеүек мәңгелек һорауҙарға яуап эҙләй. Антигона ролен йәш актриса Лилиә Ғәлина уйнай. Сәхнә әҫәре театрҙың баш рәссамы, "Алтын битлек" премияһына лайыҡ булған Альберт Нестеровтың үҙенсәлекле сценографияһы менән айырылып тора.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ТАТЫУ БУЛҺАҢ...

### бер ҡуй бөтә ҡәбиләңде туйҙырыр

Алтынды ҡоя белмәгән иретер,
Тирене иләй белмәгән серетер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше биҙәге - аҡыл, аҡыл биҙәге - сабырлыҡ, сабырлыҡ биҙәге - ҡыйыулыҡ, ҡыйыулыҡ биҙәге - йомшаҡлыҡ.

**(Боронғо һинд мәҡәле).**

Әгәр ҙә һине бәрәү ҙә яратмай икән, был бары тик һинең генә ғәйебең.

**(Ф. Додридж).**

Башҡаларға изгелек эшләгән кеше иң тәүҙә үҙенә изгелек эшләй, сөнки ул был ҡылығынан оло ҡәнәғәтлек кисерә.

**(Сенека).**

Башҡаларҙы хөрмәт иткән кеше генә хөрмәткә лайыҡ.

**(В. Сухомлинский).**

Кешенең йөҙө уның ауыҙынан сыҡҡан һүҙгә ҡарағанда ла күберәкте һөйләй ала: тел кешенең уйын ғына әйтә, ә йөҙ - тәбиғәттең үҙенең уйын сағылдыра.

**(А. Шопенгауэр).**

Йомартлыҡ күпме биреүҙә түгел, ә ваҡытында биреүҙә.

**(Ж. Лабрюйер).**

Бары тик матур булыуҙы ғына маҡсат итеп ҡуйған ҡатын-ҡыҙҙан да бәхетһеҙе юҡ.

**(Б. Фонтенель).**

Үҙеңдең буйың етмәгән нәмәгәлер һәр саҡ ғашиҡ булып йәшәргә кәрәк. Юғарыға ынтылыуҙан кеше буйға үҫә.

**(М. Горький).**

Ҡыҙыҡ был кеше тигәнең: ул байлығын юғалтһа, ҡайғыра, кире ҡайтмаҫ ғүмере үтә - быныһына битараф.

**(Абуль-Фарадж).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Йыланды күҙ алдына килтерәйек. Уның ҡойроғо башына былай ти: "Мин баш яҡта булырға тейешмен". Баш ҡойроҡҡа былай тип яуап бирә: "Һәр ваҡытта ла мин ал яҡта йөрөйөм. Ниңә хәҙер һинеңсә булырға тейеш әле?" Бәхәс һөҙөмтәһендә баш еңә һәм алға сыға. Ләкин шул ваҡыт ҡойроҡ ағасҡа уралып тора һәм баш алға китә алмай, тотҡарланып ҡала. Аптырағас, баш ҡойроҡто алға ебәрә. Шул саҡ йылан ут янып торған соҡорға төшөп китә һәм һәләк була...**

**Уҡыусылар һәм остаздар менән дә йыш ҡына шулай була. Уҡыусылар: "Остазым ҡарт инде, шулай булһа ла ул алда йөрөй. Ә алда беҙ, йәштәр йөрөргә тейеш..." - тип фекерләй. Һөҙөмтәлә..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 7 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4417
Заказ - 1876/10